

*Сәлимйән БӘҘРЕТДИНОВ*

# Эпостарҙа һәм риүәйәттәрҙә ғаилә ҡороу рәүеше

## Өйләнеү — көйләнеү

Тормош, булмыш, йәшәйеш, йорт-илдең, халыҡтың яҙмышы өйләнеүгә, ғаилә ҡороуға, нәҫел-нәсәпте ишәйтеүгә бәйле. Тереклек итеүҙең ғилләһе — парлы, йәрле булыу, ҡушылыу-түлләнеү, бала бағыу, донъяны дауам итеү. Был — изге йола ла, кире ҡаҡҡыһыҙ ҡанун да. Халыҡ аҡылынса, өйләнеү — көйләнеү, өйләнмәгәндең тамыры ҡорор, өйләнмәгәндең өйө булмаҫ, өйө булмағандың иле лә булмаҫ.

Туй йолаларының, ғаилә ҡороу ғәҙәттәренең, рәүешенең генетик тамырҙары бик боронғо дәүерҙәргә барып тоташа. Көнитмеш, йолалар, ир-егет, ҡатын-ҡыҙ, ғаилә мөнәсәбәттәре, дәрт, мөхәббәт халыҡ ижадында киң сағылған. Ундағы мәғлүмәттәр серле, фәһемле, танып белеү йәһәтенән әһәмиәтле, тере һыу һымаҡ, донъяны, тормошто йәшәртерлек, йәнләндерерлек. Грек мифологияһында һөйөү, матурлыҡ, йәнә өйләнеү һәм түлләнеү алиһәһе Афродита ләззәт, нәзәкәтлек менән кешеләрҙең күңелендә мөхәббәт тойғолары уята һәм үҙе лә ғашиҡ була. Мәҫәлән, алиһә Парисҡа Еленаның һөйөүен вәғәҙә итә һәм ҡауышыуҙарының ныҡлығын күҙәтә. Мифологияға нигеҙләнгән «Урал батыр», «Аҡбуҙат», «Минәй батыр менән Шүлгән батша» героик эпостарында ла, ырыу, нәҫел-нәсәп татыулығы һәм берҙәмлеге идеяһы үткәрелгән «Алпамыша», «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу», «Зөһрә менән Алдар» хикәйәттәрендә лә, малсылыҡҡа бәйле социаль-көнкүреште тасуирлаған «Аҡһаҡ ҡола», «Ҡара юрға», «Ҡуңыр буға», «Заятүләк менән Һыуһылыу» кеүек башҡа эпик әҫәрҙәрҙә лә, тормош-көнкүреш риүәйәттәрендә, легендаларында ла мөхәббәт, ғаилә күренештәре һүрәтләнә. Тыуған ер, ил өсөн ҡара көстәргә, яуыздарға, залимдарға ҡаршы көрәш кәләш алыу, түл йәйеү, ғаилә мөнәсәбәттәре күренештәре менән үрелеп бара. Бында тормош ысынбарлығы, борон заманда ҡыҙ эҙләү, һайлау, кәләш алыу, ғаилә ҡороу рәүеше, йолалары, халыҡтың өйләнеүгә ҡарашы, был тәңгәлдә тупланған аҡылы сағыла. Борон-борон заманда ла, унан һуң да, йәғни кешелек донъяһының һәр мәлендә лә мөхәббәт, ғаилә темаһы көнүҙәк булып ҡала.

Дини-мифологик ҡараш буйынса, Аллаһы Тәғәлә кешене үҙенең ҡиәфәт-сүрәте (образы) һәм йораты, ишараты буйынса яралта. Әҙәм нәҫелен башлап ебәреүселәр тәү ата — Әҙәм (Адам), тәү инә — Һауа (Хавва, Ева). Әҙәм ер йөҙөнән бар ителгәнгә — ер йөҙө, Һауа иһә ҡабырғанан, ир тәненән яралтылған тигәнде, йәнә йәшәү, тормош мәғәнәһен аңлатыр. Әҙәмдең нәҫелдәре үҙе рәүешле тыуа. Риүәйәттәрҙә әйтелеүенсә, Һауа һәр йөккә ҡалыуынан игеҙәк бала таба, бөтәһе яҡты донъяға етмеш пар бәпес тыуҙыра, береһе малай, икенсеһе ҡыҙ була һәм улар әҙәм нәҫелен ишәйтә.

Олуғ поэтик ҡомартҡы «Урал батыр»ҙа[1] Урал менән Шүлгәнде донъяға тыуҙырыусылар — Йәнбирҙе менән Йәнбикә. Урал батырҙың Ҡатил батша ҡыҙынан тыуған улы — Яйыҡ, Гөлөстандан — Нөгөш, Һомайҙан — Иҙел, Шүлгәндең Ай ҡыҙы Айһылыуҙан тыуған улы Һаҡмар атлылар.

Мифик заттар ҙа парлы, йәрле. Күк һәм ҡоштар батшаһы Самрауҙың ҡатындары — Ҡояш менән Ай, уларҙың ҡыҙҙары — Һомай менән Айһылыу. Һомай Йәнбирҙе ҡарт менән Йәнбикә ҡарсыҡҡа, улдары Урал менән Шүлгәнгә үҙенең кемлеген түбәндәгесә әйтеп бирә:

Ерҙә һис кем тыумаҫтан,
Берәү аяҡ баҫмаҫтан,
Ҡуш булырға йәр эҙләп,
Ерҙә һис кем тапмағас,
Бүтән йәндән һайларға
Берәүен тиң күрмәгәс, —
Күккә осоп йәр эҙләп,
Айҙы, Ҡояшты күҙләп,
Үҙенә йәр һайлаған,
Икеһен дә арбаған,
Бар ҡоштарға баш булған
Самрау тигән атам бар.
Ике балаһы булған,
Балаһы ла, үҙе лә
Һис ауырыу күрмәгән,
Үҙҙәре лә, балаһы —
Һис берәүһе үлмәгән.
Шундай данлы атам бар...
Йәншишмәнән һыу алып,
Инәм тәнем йыуҙырған
(Барығыҙға билдәле
Үҙ нурына һуғарған
Ҡояш тигән инәм бар)...
Алтын сәсем тараһам,
Нурға илде күмәмен:
Көндөҙ ергә нур һибәм,
Кисен айға нур бирәм.

Был мәғлүмәттән аңлашылыуынса, хатта ки ерҙә һис кем тыумаҫтан, Самрау батша ҡуш булырға тиң күрер йән-йәр эҙләй, күҙләй, һайлай һәм арбай, Ҡояш инә иһә Йәншишмәнән һыу алып, бәпесен йыуҙыра, үҙ нурына һуғара, балаһы ла илде нурға күмә. Иран, Һин-

достан, Египет, Греция мифтарында ла мәңгелек идеяһы, йәр һайлау күҙаллана, Ер һәм Күк ирле-ҡатынлы пар итеп ҡабул ителә. Әйткәндәй, күңелгә хуш йәр эҙләү, тиң күрешеп ҡауышыу, ғаилә ҡороу, бала һөйөү, бәпләү бәхетенә ирешеү, балалы йорт нурлы йорт булыу — кешелек өсөн хәҡиҡәткә әйләнгән күренеш.

Ҡатын-Ҡояш тыуыуы мотивы, Ҡояш культы тураһында миф Корея, Ҡытай, Япония кеүек Алыҫ Көнсығыш илдәре ҡәүемдәре өсөн дә әһәмиәтле асыл. Төрки ҡәүемдәрендә Ҡояш инәнән тыуған Һомай — донъяны хозур, ырыҫлы, кешеләрҙе бәхетле итеүсе ҡош-ҡатын, балаларҙы ҡурсалаусы һәм яҡлаусы изге рух. «Уғыҙнамә» дастанының ҡарлуҡ-уйғыр версияһында Уғыҙхан инә ҡарынында яҡтылыҡ нурынан мөғжизәле рәүештә ярала һәм батыр булып тыуа. Уғыҙхан яҡтылыҡ нуры менән килгән йыһан ҡыҙына өйләнә. Унан батырҙың өс оло улы — Көн (Ҡояш), Ай, Йондоҙ, ер һылыуынан өс кесе улы — Күк, Тау, Диңгеҙ тыуа һәм уларҙан уғыҙ нәҫелдәре тарала.

«Һуңғы һартай» дастанында[2] Һартай ырыуынан яуға ҡаршы яу, дауға ҡаршы дау булған, ир ҡорона инмәҫтән батыр тигән дан алған, аҡһаҡал тип танылған Бурнаҡ бей улы Ялыҡ үҙенең йәшәйешен, ғаилә тормошон шулай һүрәтләй:

Көс-ғәйрәтем урғылып,
Ташып торҙо йәш саҡта:
Ҡырҡмыш тайҙы ҡулыма
Күтәрҙем мин орсоҡтай...
Өлөшөмә — көмөшөм,
Өсәү ине кәләшем,
Өсөһө лә сос, уңған,
Әйтерһең дә, бер туған.
Ятҡым килһә бер аҙға
Ауырайып ҡымыҙҙан,
Урын йәйеп һалалар,
Сымылдыҡҡа ябалар.
Һандуғастай һайрашып,
Күңелемде табалар.
Төндөк ҡаплап тирмәмдә
Береһе ҡала эргәмдә...
Менәм тиһәм — толпарым,
Сөйәм тиһәм — шоңҡарым.
Сыҡһам кейек ауларға,
Һәр саҡ уңды һунарым.
Ауҙан ҡайтһам, ҡымыҙы
Күпереп, күпсеп тора,
Өс тирмәмдә өс кәләш
Һағынып көтөп тора.
Ҡымыҙ эстем, йыйҙым ҡор,
Күңел астым, һөйҙөм йәр,
Шуның өсөн йәшәнем тип,
Әйтергә лә хаҡым бар...
Минән тыуҙы был донъяға ике ул,
Атаһына ике ҡанат, ике ҡул.

Ҡармасан тип атаным баш баламды,
Ата юлын дауам итер улымды,
Сәрмәсән тип исем ҡуштыҡ кинйәгә,
Бабам иҫтәлеген хөрмәт итмәгә.

## Үлемһеҙлектең асылы

«Урал батыр» эпосында аңлатылыуынса, йәшәйештең, үлемһеҙлектең асылы — үҫемлек, тереклек донъяһының алмашынып тороуында: «Инәнән тыуған берәү ҙә был донъяла үлмәһә, үҙ миҙгеле еткәндә һис йәшеллек бөтмәһә, — унан беҙгә ни файҙа? Ҡайһылар йылға ике-өс түлләһә, бүтән йәндәр ҡаңғырып, ашарына тапмаһа, һис бер йылға аҡмаһа, саф шишмәләр сыҡмаһа, ерҙәге һыу тынсыһа, — шул саҡта беҙ нишләрбеҙ? Үлемдән ҡурҡыр йән булһа, ҡотолорға юл эҙләр, түл йәйергә уйлаһа, илде гиҙеп яй эҙләр».

Мөхтәр Сәғитов «Башҡорт халыҡ эпосы» мәҡәләһендә яҙыуынса: «Әҫәрҙә кешелек, тереклек — мәңгелек, әммә кешеләр, тереклек эйәһе быуын-быуын килеп-китеп тора, һәм был — мәңгелек заң тигән философия үткәрелә».[3] Үлемһеҙлектең, тормошто дауам итеүҙең сараһы: түл йәйеү, байманлыҡта түлләү, бала сығарыу, табыу, бала бауырым, тиеү. Ғүмерҙең дауамы — бала. Ҡыҙ күңелендә — балалы бишек, ир күңелендә — эйәрле ат. Күп бала тыуһа — бик яҡшы, бер бала тыуһа ла — яҡшы, берәү ҙә тыумаһа — бәхетһеҙлек.

Ҡанбабалар аманаты буйынса, үлем бөтөнләй бөтөү түгел, ә яңырыу ысулы ғына: кешенең ғүмере балаларында дауам итә, уларҙа уның ҡаны, тәне йәшәй, артабан ейән-ейәнсәрҙәрендә, бүлә-бүләсәләрендә... һәм мәңге шулай. Тормоштоң асылы — тормоштоң үҙендә. Хоҙай Тәғәлә аҡылы бәндәләрҙе үлем өсөн йәшәргә һәм йәшәү өсөн үлергә өйрәткән. «Һуңғы һартай» дастанында бик мәғәнәле һәм фәһемле итеп әйтелеүенсә, «катын эҙләй ҡатын-ҡыҙҙан тыуған йән, ҡалдырырға ер йөҙөндә нәҫелен».[4]

Кешелектең боронғо дәүерендәге һәм унан һуңғы осорҙағы тормош, ғаилә рәүеше сағылған «Урал батыр» һәм уның дауамы булған «Аҡбуҙат», «Минәй батыр менән Шүлгән батша» эпостары йәншишмәләй рухи сығанаҡ. Ҡанбабалар, батырҙар ҡәрҙәштәренең именлеге, үлемгә юл ҡуймай байманда рәхәт йәшәүе, ырыу мәнфәғәте, ер ҡото өсөн мифик дошмандарға ҡаршы көрәшкән ваҡытта халыҡ һүҙен йыҡмай ҡыҙ ала, туй яһай һәм был хәл-ваҡиғалар үҙ-ара тығыҙ бәйләнештә күрһәтелә.

## Йәр эҙләү, йәр һайлау, ҡыҙ йәрәшеү

Эпик әҫәр геройҙары ниндәйҙер сәбәп, уй, ниәт-маҡсат менән юлға сыға һәм ул әҫәрҙең асылын тәшкил иткән хәл-ваҡиғалар менән үрелеп китә. Әйтәйек, «Аҡбуҙат» эпосында Һәүбән Урал батырҙың дейеүҙәр урлаған Аҡбуҙатын, алмас ҡылысын ҡулға төшөрөү өсөн һыу аҫты донъяһына сәйәхәт ҡыла, унда Шүлгән батша ҡыҙы Нәркәсте тап итә, Шүлгән батшалығын ҡыйрата, ер ҡыҙҙарын азат итә, ҡәрҙәштәренә күлдән йылҡы малы сығара, Нәркәсте кәләш итеп алып ҡайта. «Заятүләк менән Һыуһылыу» эпосында[5] ла Заятүләк һыу батшаһы ҡыҙы

Һыуһылыуҙы йәр итә, бик күп мал эйәртеп ер өҫтөнә ҡайта. «Ҡара юрға»ла[6] матурлығы, мәргәнлеге, һүҙҙә сәсәнлеге менән ир булып танылған Әбләй тирә-яҡта иң яҡшы ат булып дан алған Ҡара юрғаһы менән ил аралап, ер күреп, ир танып йөрөгәндә шундай йәр ҙә эҙләй:

Урал буйын буйланым,
Күп йәйләүҙе ҡуйманым,
Уңға-һулға ашанан
Иҙелен дә күп кистем,
Күбәләктәй уйнаған
Ҡыҙҙарының ҡулынан
Һыуһынын да күп эстем.
Һайрар ҡошто туҡратып,
Таң ҡалдырып тыңлатҡан,
Күк ҡояшы ҙурлаған,
Кисен айы бәпләгән,
Йәйге еләҫ таңында
Моңон сәсеп йырлаған
Бер һылыуҙы эҙләнем.

Бал ҡорто инәһе һымаҡ ҡыҙҙар араһында айырылып торған йылғыр ҡара күҙле, оҙон сәсле, төҫ-башы уйнап торған Маҡтымһылыуҙы күреп, Әбләй һүҙһеҙ ҡала, уға күҙе төшә. Таҡыя башлы ҡурайҙа илендә моңон сәскән, батыр булып майҙанда даны сыҡҡан, тыуған иленән йыраҡта ла телгә алынған Әбләйҙе Маҡтымһылыу ҙа белә һәм йәйләүҙә ат өҫтөндә уйын күрһәткәндә, уйын-көлкө менән кистәр уҙғарғанда уға ғашиҡ була.

«Урал батыр»ҙа Йәнбирҙе ҡарт Шүлгән менән Уралға аҡҡоштар осҡан яҡҡа табан күҙ яҙмай китергә, арттарынан күҙәтеп барып, Йәншишмәнең урынын табырға, әгәр юлда Үлем осраһа, башын ҡырҡып алып ҡайтырға ҡуша һәм ике улын ике арыҫланға мендереп оҙата. Сәфәр сыҡҡан икәү көн, ай, йыл һанап, күл, йылға кисә, күп урман, тау аша. Һулға киткән Шүлгән барыһы бергә рәхәт, дуҫ йәшәгән Самрау иленә, уңға киткән Урал яуыҙлыҡта дан алған Ҡатил батшалығына юлыға.

Ҡатил илендә «ҡыҙы һайлай егетен, үҙе һайлай ҡыҙ-ҡырҡын, ҡалғандары тағы ла үҙҙәренә һайлайҙар». Ҡыҙҙар һайлап йөрөгәндә Ҡатил аҡһаҡалды саҡыртып, һылыуҙың тешен тикшертеп, үҙе уның алһыу йөҙөн, йәнә күкрәктәрен ҡапшап, билен тотоп ҡарай, битенән үбеп, һарайға был ярар, ти. Дүрт ҡол күтәргән алтын тәхет өҫтөндә ултырып, аҡһаҡалдар эйәртеп, батша ҡыҙы майҙанда рәт торған бар егетте аралап, йәр һайлай, оҡшарҙайын тапмай. Ахыр сиктә Уралға килеп етә, туҡтап уға һүҙ ҡуша һәм алма бирә, уны һарайға алып барырға аҡһаҡалға ымлай. Халыҡ: «Батша ҡыҙы һөйҙө бит! Батша кейәүе булды бит!» — тип шау килә. Бер аҡһаҡал Уралға йола аңлатып, кейәү булдың беҙгә, тип, уның арҡаһынан һөйә, юл башларға була. Мәгәр Урал быға күнмәй, аҡһаҡалдарға эйәреп һарайға китмәй. «Мин ят йоланы белмәйем, эш аҙағын күрәйем, аҙаҡ барһам, барырмын, ҡыҙҙы эҙләп табырмын», — тип батша ярандарының һүҙен кире ҡаға. Батша ҡыҙы асыуланып Урал янына килеп үпкә һүҙҙәрен әйтә:

Егет, һине һайланым
Һарайыма барырға.
Алма биреп ымланым,
Мине тиңгә алманың,
Һарайыма барманың,
Кире ҡаҡтың һүҙемде,
Бөтә ҡолдар алдында
Ҡара иттең йөҙөмдө.

Күреүебеҙсә, батша ҡыҙын тиңгә алмау, уның һүҙен кире ҡағыу йөҙөн ҡара итеүгә бәрәбәр. Хатта Ҡатил тәхетенән төшөп төкөрөк сәсә: «Ҡайһы ырыу егеттән минең ҡыҙым хурланған?.. Ниңә йолам боҙаһың, ниңә бармай һуҙаһың?» Урал ят йоланы һөймәүен белдергәс, уның сит кеше икәнлеген белгәс, аҡһаҡалдар, батырҙар, батша яҡлылар уға ҡыҙҙы биреүҙән, уны кейәү ҡылыуҙан көнләшә, батша иһә шашып, ҡыҙына әйтә:

Мындай тинтәк һайлама,
Күҙең юҡҡа талдырып,
Юҡ кешегә ҡарама,
Ҡайтсы, балам, ҡайт, әйҙә,
Һарайыңа кит әйҙә.

Урал яуызлыҡҡа юл ҡуймаясағын, халыҡты ҡотҡарасағын әйткәс, Ҡатил, ҡанһыраған икән был, йәнһерәгән икән был, тип, уны юҡ итергә фарман бирә. Мәгәр ҡыҙы бының менән килешмәй, егеттән ваз кисмәй атаһына ялбара:

Атаҡайым, ҡуйсәле,
Юҡҡа әрәм итмәле,
Миңә биргән антың бар,
«Кейәү һайла үҙең», — тип
Миңә әйткән һүҙең бар.
Был егетте һайланым,
Кейәүем тип уйланым,
Һөйләшергә егеттең
Һис яйына ҡуйманың.
Атаҡайым, ҡуйсәле,
Юҡҡа әрәм итмәле!

Ҡанлы йәшен түкһә лә, Ҡатил батша ҡыҙының һүҙен алмай, ҡыҙ яйына ҡуймай. Урал иһә алышта Ҡатилдың дүрт батырын олаҡтырып, батшаны ла, аҡһаҡалдарҙы ла он-талҡанға ҡалдыра, бар халыҡты йыйып аранан баш һайлата. Йыйын ҡорған халыҡтан иң ҡарты Уралға былай тип әйтә:

Егет тә егет икәнһең,
Егет, батыр икәнһең;
Йөрәгеңә таянып,
Беләгеңде һыҙғанып,
Беҙҙәйҙәрҙе ҡыҙғанып
Килгән егет икәнһең.

Батша асыуын ҡуптарған,
Һиңә ҡаршы өскөргән,
Шул айҡанлы беҙҙәрҙе
Шатлы азат иттергән —
Батша ҡыҙы булды бит.
Һине һөйөп шаулашты,
Атаһы мән даулашты;
Батша ҡыҙын ал, егет,
Бергә ғөмөр ит, егет!

Барыһы ла димләшкәс, халыҡ һүҙен тыңлап, Урал ҡыҙҙы ала, туй яһай. Мәгәр туй уҙғандан, бер нисә көн булғандан һуң, ары китә, сәфәрен дауам итә.

Күреүебеҙсә, Ҡатил батша илендәге хәл-ваҡиғаларҙа ир-егет, ҡатын-ҡыҙ мөнәсәбәттәренә, һөйөүгә бәйле күренештәр тасуирлана: йәр һайлау; ҡыҙҙың һаулығын, һомғоллоғон ҡарау; егетте алма биреп ымлау; ҡыҙҙы ят кешегә биреүҙән көнләшеү; йола боҙоусыға нәфрәт, яза; күңеле хуш иткәнде яҡлап, ҡыҙҙың атаһына ялбарыуы...

Бындай йолалар Көнсығыш ҡәүемдәре ауыҙ-тел ижадына ла хас күренеш. Мәҫәлән, алма биреп йәки сөйөп йәр ымлау, һайлау батырҙар тураһындағы эпостарҙа, әкиәттәрҙә лә күҙәтелә. «Аҡбуҙат» эпосында[7] иһә Мәсем хан күлдәге ҡарсыҡты алып ҡайтырға батырсылыҡ иткән батырға бирергә ҡыҙы Айһылыуҙың ҡулына алма тоттора:

Бына, ҡыҙым, бер алма,
Батырҙарыңды һайҙа.
Сорғот алма алдына,
Күнгән батыр шартыма
Алма алыр ҡулыңдан...

Грек мифологияһында Аталанта үҙен һоратыусыларға һынау ойоштора. Меланион кәләш итеп алыу өсөн Аталанта менән йүгереүҙә ярышҡанда алтын алмалар ташлай һәм, уларға албырғап, ҡыҙ еңелә. Донъя сигендәге Океан йылғаһы буйында йәшәгән гесперидтар (нимфалар) Олимптың баш алиһәһе Гераға Гея (ер-инә) туй бүләге итеп биргән мәңге йәш булыу алмаларын һаҡлай. Бында алтын алма йәшлек тылсымы һымаҡ ҡабул ителә.

«Аҡбуҙат»та яуыз көстәрҙе еңеп ҡайтҡас, Һәүбән Урал халҡын йыйынға йыйып, ил батырҙарын көрәштерә, ете батыр алдын сыҡҡас, уларҙы ете ырыуға баш итә. Һәүбән Мәсемдең ҡыҙы Айһылыуға кейәү һайларға рөхсәт итә. Айһылыу Ҡыпсаҡ батырҙы һайлай. Атаһын, уның яҡындарын ғәйеп кенә түгел, ә харап иткән батырға ҡыҙҙың кейәүгә сығыуы бөтөнләй башҡа һыймаҫ, аҡыл етмәҫ аҙым, эш-ҡыланыш кеүек. Мәгәр донъяның үҙ ҡануны. Мостай Кәрим яҙғанса, был күренештең ғилләһе шунда: «О ҡатын-ҡыҙ ҡыйыулығы һәм дыуамаллығы! Төрлө ҡәбиләләрҙең ир-егеттәре бер-береһе менән дошманлашҡан, һуғышҡан, үлтерешкән, ә иң батыр һәм сибәр ҡыҙҙар, тимәк, иҫ киткес илаһи заттар, ҡаршы яҡтың иң батыр һәм көслө ир-егеттәренә ғашиҡ булған да улар менән ҡасҡан. Ҡәбиләләр араһындағы ҡан дошманлыҡҡа төкөрҙө ти улар — уларҙың аңында үлтереү түгел, ә тыуҙырыу, бала табыу, иң көслө һәм матур ирҙәрҙән бала табыу».[8]

Эпостарҙа ҡаршылыҡта, дошманлыҡта булған илдәр, ҡәүемдәр араһында өйләнешеү мөнәсәбәттәре инҡар ителмәй. Үҙ-ара алыш-көрәш тәбиғи мөхитте, йыһанды хаос көстәренән һаҡлауҙы күрһәтә. Күп осраҡта яуыз көстәр ер аҫты донъяһы, үлем менән бәйле, ә ил-йортоң, ырыуың «урта ер»ҙә (кешеләр йәшәгән урын) урынлашҡан һәм ул күк аллаларының ҡурсалауында.

«Урал батыр» эпосында мифик донъялар, батшалыҡтар, ундағы тормош күренештәре, йолалар һүрәтләнә. Урал Һомайға биш ил барын белеүен, береһендә үҙе тыуыуын, икеһен йөрөп күреүен, ҡалған тағы икәүһен күрергә тип сығыуын әйтә. Уралдың ифрат та алыҫ илдәге Самрау батшаның ҡыҙы Һомайға өйләнеүе әҙәм нәҫелен яҡшыртыу, ишәйтеү, тыуған ерҙе яңыртыу, йәшәртеү, мәңгелек итеү әмәле һымаҡ та ҡабул ителә.

«Минәй батыр менән Шүлгән батша» эпосында[9] әйтелеүенсә, ҡыҙ бирмәк — ул намыҫ эше. Көрәшсе лә, йырсы ла, бейеүсе лә, һылыу ҙа Таңдысаға лайыҡ кейәү — Минәй батыр. Ул ете ырыу башҡорттарының ерҙәренә ымһынған хазарҙар менән һуғышта батырлыҡ күрһәтә, көрәштә һынатмай, уҡ менән алтын балдаҡтан үтә ата, етәкләп айыу алып килә, аждаһаның һырт ҡайышын һыҙырып ала, юхаға әйләнгән аждаһаны тураҡлай, ил һәм халыҡ өсөн йәнен дә, тәнен дә йәлләмәй абруй ҡаҙана. Батыр ярҙамында халыҡ шомдан ҡотолоп, донъяға тәүге тыуғандай шикелле була. Күҙһеҙҙәрҙең күҙе, һөмһөрҙәренең йөҙө асыла, яҡтыра, бойоҡ күңелдәр, баҫынҡы йөрәктәр уяныр тереләнә, нурлы йөҙҙәрҙән нур тарала. Мөһабәт кәүҙәле матур Минәйҙән байрамға килгән ҡыҙҙар күҙҙәрен алмай. Уға башҡорт ырыуҙарының һынсы-йондоҙсоһо Өлкәр ҡарттың берҙән-бер ҡәҙерле ҡыҙы Таңдысаны кейәүгә бүләк итеп бирмәкселәр. Таңдыса менән тиңдәш йәштәр көрәшеп, ҡыҙҙы еңһә, уның ҡалып та ҡуйыуы бар. Һыу һөлөгө шикелле Таңдысаға күҙҙәре төшкән егеттәр көрәшеп ҡараһалар ҙа, ҡыҙҙы ташлай ҙа, йыға ла алмай. Таңдыса иһә: «Мин Минәйҙе һынамай ҙа күреп белдем. Илем, йортом, халҡым бүләк иткәс, барырға ризамын», — тип, Минәйгә ҡулын бирә. Ғәҙәт буйынса ҡыҙҙы йәшереп, табып, егеткә ҡушалар. Йола һаҡлап, кейәү ете көн ҡайны-ҡәйнә йортонда тора. Таңдыса йөрәкһенеп, әхирәттәре менән уйнаған, еләк-емешкә йөрөгән ерҙәре менән хушлаша, йырҙарын йырлай, уйындарҙа уйнай...

Артабан Минәй батыр Таңдысаны, ҡәрҙәштәрен Шүлгән батша тотҡонлоғонан ҡотолдора, ҡотолғандарға ғүмерҙәренә етәрлек мал-тыуар, байлыҡ таратып бирә. Халҡы риза булып, Минәйгә изге теләк, оҙон ғүмер, ҡот-ырыҫ теләй:

Йөрөгән ерең аҡ буһын,
Ҡылған эшең хаҡ буһын,
Һөйөп алған Таңдысаң
Үҙеңә гел саҡ буһын!
Таңдысаң булһын түлде,
Тапһын улдарҙы — елде,
Оҡшап атай затына,
Дан килтерһең атыңа!
Түшең киреп, ярпайың,
Шипкерт булып, ҡарпайың,

Таңдысаң менән икәү
Тиң йәшәп, тиң ҡартайың!

Шуныһы иғтибарға лайыҡ: борон ҡайны-ҡәйнә йортона барасаҡ, төшәсәк киленгә генә түгел, ил батыры булып танылған, кейәү булынған егеткә лә теләк теләнгән.

«Һуңғы һартай» дастанында Ялыҡ бей йөрәгендә ғәййәрлектең сиге, алышҡанда ҡыйыулыҡтың тиңе юҡ ҡаһарман улы Ҡармасанға Аҡһыуҙың аръяғында йәшәгән Ҡара абыҙҙың хур ҡыҙылай ҡыҙы, яҡын-ара ерҙең сағыу йондоҙо Айбикәне йәрәшә. Уның алһыу нурҙар уйнап тора йөҙөндә, тылсым тулы уттар яна күҙендә. Ҡармасан ата һүҙен йыҡмай, килешә, Ҡара абыҙға яусы ебәрә. Аҡһаҡал ҡалымға өс көтөү ҡуй, ярты өйөр йылҡы малы һорай. Ялыҡ бей: «Баш һау булһа, йәлме ни мал өлөшө? Уға лайыҡ Ҡармасандың кәләше!» — тип, талапты үтәй. Күркәм байрам, оло туй шулай тасуирлана:

Ат еткән дә ерҙән килде ҡунаҡтар,
Хат еткән дә ерҙән килде ҡунаҡтар.
Йылға булып аҡты ҡымыҙ, буҙалар,
Әсе балдан ауыҙ итте ҡоҙалар.
Китте бер саҡ уйын-көлкө, йыр, ҡурай —
Һәр тирмәлә моңло көйҙәр яңғырай.
Булды бейеү, әйтелделәр таҡмаҡтар,
Туй мәлендә ауҙы хатта туҡмаҡтар.
Бар ҡунаҡтар ашап-эсте туйғансы,
Уйнап-көлдө күңелдәре булғансы.

## Егетте ҡурсалау

Ғишыҡ уятҡан, күңел ятҡан егетте ҡыҙ яҡын күрә, хәүеф-хәтәрҙән ҡурсалай, уға илгә сәсмәҫ серҙе сисә. Сөнки донъяла йән рәхәте һөйгән йәр менән, батыр егет ҡыҙ күрке лә, ил күрке лә. Шүлгән батша Һәүбәндән ҡотолорға уйлағас, Нәркәс атаһынан батыр егеткә биргән антын боҙмауын, уның теләген үтәүен үтенә:

Атаҡайым, ул егет
Һүҙем тыңдап килде ул,
Мине атҡан сағында
Өйрәк тиеп белде ул.
Атаҡайым, тағы ла
Мине ҡосто ҡулына,
Уның ҡулы йылыһы
Эҙе йөрөй тәнемдә.
Уның ҡаны ҡойолһа,
Маң тәнемдә ҡалыр ул,
Уның йомшаҡ телдәре
Йөрәккә май булыр ул.
Атай, уға ҡаныҡма,
Уның ҡанын ағыҙма,
Уның өсөн бар Урал
Эҙҙәр һинән ҡарымта.

Уның теләге ҙур түгел:
Һинән тәхет һорамай,
Малың һорап тағы ла
Байҙығыңды муйырмай.
Атай, мине бала итһәң,
Егеттең ҡанын ағыҙма,
Бағауылһыҙ егеттең
Йәнен алып дан алма!
Егеткә бир Буҙатты,
Һынап ҡара ғәйрәтен.
Тотоп алалһа егет,
Уралда йәйһен ҡанатын.

«Заятүләк менән Һыуһылыу»ҙа[10] Һыуһылыу Заятүләкте байтаҡ ваҡыт ата-инәһенә күрһәтмәй йәшереп тота. Тик берҙән-бер көндө атаһы ҡыҙ тирмәһендә егеттең йәшенеп йәшәүен һиҙә, сер асыла. Һыуһылыу дөрөҫөн һөйләп бирергә, ер улын яратыуын, уның менән бергә йәшәргә теләүен әйтергә мәжбүр була. Быны ишеткәс, Асылыкүл батшаһының асыуы ҡабара: күл болғана, ҡайнай, һыу ташып, тирә-яҡты баҫа башлай. Баһадир кәүҙәле, нурлы йөҙлө, аҫыл егетте күргәс кенә Асылыкүл батшаһының күңеле тыныслана, асыуы баҫыла.

«Ҡара юрға»ла Маҡтымһылыу ҡалынға (ҡалым) һәр төрлөһөнән бер өйөр йылҡы биреп, уны алырға даулашҡан Нөгөш бай улынан баш тарта, йән һөйгәне Әбләйҙе яҡлап, атаһы Мәсем ханға шулай һамаҡлай:

Атам, үҙең данлы ир,
Ирҙе һайлай белмәнең.
Ҡыптыр тундың эсендә
Ир үҫер тип белмәнең.
Аҫау өйрәтеп, ат менмәҫ,
Майҙандарҙа дан алмаҫ,
Атанан ҡалып мандымаҫ,
Төйәген яуҙан һаҡламаҫ,
Үҙе кәләш күҙләмәҫ, —
Бөгөн тыуғандай бер байғош
Миңә кейәү булалмаҫ!
Һаҡмар буйы яланлыҡ,
Сауҡа үҫмәҫ, тимәгеҙ.
Ярлы егет Әб(е)ләй
Малды тапмаҫ, тимәгеҙ.
Ирмен тигән ир бумаҫ,
Ҡоро маһайып һимерһә,
Айырым ҡаҙан аҫалмаҫ,
Һөнәрһеҙ ятып тилмерһә.
Мин ҡалынға һатылмам,
Егете ир бумаһа,
Ҡуйынына һарылмам,
Һөйөүҙә йор бумаһа!

Маҡтымһылыу өйөр-өйөр йылҡыға, көтөү-көтөү һыйырға, һигеҙ апаҡ тирмәгә ҡыҙыҡмай, һөнәре менән данлы Әбләйҙе мең артыҡ күрә, уның менән ҡауыша.

## Ҡатын-ҡыҙ һылыулығы идеалы

Ата-инә теләгәнсә, ҡыҙ баланың сибәр булыуы яҡшы. Ҡыҙ булһа, ҡыҙ булһын, йондоҙға тиң булһын, тигәндәр. Боронғолар әйтемләүенсә, ҡыҙыл төлкө — ер күрке, матур егет — ил күрке, матур ҡыҙҙар — өй күрке, матур ҡатын — ир күрке. Һылыу ҡыҙҙар ырыу, ил-йорт йәме, зиннәте һаналған. Улар ил күрке булып танылған батыр егеттәргә йәрәшелгән, батшалар тарафынан урланған, хатта яу менән яулап алынған. «Урал батыр» эпосында Әзрәкә һарай ҡыҙҙарын йыйып, һылыуҙарын күҙләй, Шүлгән урланған ҡыҙ Айһылыуға йән ата:

Төркөм-төркөм ҡыҙҙарҙың
Бары һайлап ҡуйғандай,
Күҙҙең яуын алырҙай,
Күргәндәр таң ҡалырҙай.
Күмәк ҡыҙҙың эсендә,
Буҙ таштарҙың янында
Бөртөк ятҡан ынйылай,
Күктә балҡып йәмләнгән
Йондоҙҙарҙың айындай,
Һылыуҙарҙың битендә
Айырым торған миңендәй,
Типһән-туғай үләнен
Йәмләп торған гөләндәй —
Һылыуҙарҙың һылыуы
Айһылыуҙы күргәс тә,
Шүлгән күҙен текәгән...

Кейәү иткәндән, туйы булғандан һуң, ҡыҙ ҙа уны һөйгәнгә, бик тә һылыу булғанға мауығып, Шүлгән һарайға йотолған, бөтә эшен онотҡан. Һомайҙы ил маҡтағас, Шүлгән уны ла алмаҡ була:

Шүлгән күргән барыһын,
Аралағы берәүһен
Күҙгә элеп күҙләгән,
Ни тиергә белмәгән.
Үҙе үҫеп, ил гиҙеп,
Мындай һылыу күрмәгән.
Йөҙө айҙай балҡыған,
Күкрәктәре ҡабарып,
Һылыу булып балҡыған.
Тирә-яғы, бар ҡыҙ ҙа,
Һарай алды, бар ер ҙә
Шул һылыуҙан йәм алған,
Бары шунан йәнләнгән
Һымаҡ төҫлө тойолған,
Күҙ алдында бар донъя,
Гүйә, аңа эйелгән!

Һомайҙың һылыулығы «бар ҡыҙ, бар ер унан йәм алыу, бары унан йәнләнеү» менән айырыуса күркәм, айырыуса баһалы. Урал батыр алдында иһә Һомай шундай һында, ҡиәфәттә пәйҙә була:

Аның усма шәлкемдәй,
Енсегене ҡапларҙай
Кәйтәндәр мән биҙәлгән
Сәс толомо һалынған;
Оҙон керпеге үтә
Ҡара күҙе текәлгән;
Уйнап торған ҡыйғас ҡаш
Күҙ өҫтөндә йылмайған;
Тертәйешкән ҡалҡыу түш
Күҙ алдында тулҡынған;
Бал ҡортондай нәҙек бил
Борғаланып уйнаған;
Гүйә, күптәнге танышы,
Көмөштәй саф тауышлы;
Уйнап-көлөп һүҙ ҡушҡан
Бер ҡыҙ күргәс, Урал да
Ни әйтергә белмәгән,
Үҙе күргән Һомай тип
Уйына ла алмаған.

Һомайҙың һорауы буйынса эҙләп тапҡан Айһылыуҙы иһә Урал шундай рәүештә күрә:

Ҡуңыр һылыу, ҡыйғас ҡаш,
Эйәк-бите уйылған,
Һул битенең уртаһы
Күҙ ҡаралай миңләнгән;
Йүрмә-йүрмә ишелеп,
Ике яҡлап, сикәләп,
Тамсы гөлдәй елберҙәп,
Иң башынан һалдырып,
Оҙон сәсен матурлап,
Өсмә яһап төшөргән;
Оҙон керпеге аша
Ҡара күҙен йылмайтып,
Бит уймаһын уйнатып,
Көләс йөҙөн көлдөрөп,
Дертләп торған күкрәген
Уралғараҡ ыҡлатып,
Һөйләп киткән шулай тип...

Ҡатил батша яуызлығынан урманға ҡасҡан, тамыр ашап көн иткән ҡыҙ ҙа хатта һылыу рәүешендә һүрәтләнә «Урал батыр» эпосында:

Көнгә янған тәндәрен,
Һырт ҡаплаған сәстәрен,
Һуплап юнған ағастай,
Балтыр ите беләген,
Ауҙа туйған ҡыйғырҙай
Кәпәйеп торған күкрәген,
Ҡуға аша йымылдап
Торған күлдәй күҙҙәрен,

Бал ҡортондай ыҡтымат
Нескә, һылыу билдәрен, —
Оялыпмы, ҡурҡыпмы,
Ышыҡланып маташҡан
Бер ҡыҙы мән ҡарсыҡҡа
Урал батыр тап буған.

«Ҡара юрға» эпосының бер версияһында Ҡара юрғаның һыртындағы көмөш ҡашлы эйәрҙә ултырған һылыу ҡыҙ шулай тасуирлана:

Ун бармағы ҡамыштай,
Утыҙ теше көмөштәй,
Бер бите айҙай балҡыған,
Бер бите көндәй балҡыған,
Томбойоҡтай күкрәге
Күпереп үҫеп ҡалҡынған,
Эй һылыу ҡыҙ, һылыу ҡыҙ,
Эй һылыу ҡыҙ, һылыу ҡыҙ!

«Асылыкүл» риүәйәтендә[11] иһә Арыҫланхандың ҡыҙы Аҫыл ер йөҙөндәге һылыуҙарҙың һылыуы: «Ҡоралай һымаҡ һомғол, талсыбыҡтай зифа. Ә күҙҙәре көҙгө төндәй сөм ҡара, аҫыл мәғдән төҫлө балҡып тора. Ҡыйылып киткән ҡыйғас ҡаштар ҡаймалап алған үҙҙәрен. Иренгенәләре тулышып бешкән сейә төҫлө. Йөҙө иртән яуған ҡырпаҡ ҡарҙай аҡ. Бит алмаларына ал таң шәфәғе яғылғандай. Сылтыр тәңкә, аҫыл таш менән нағышланған ҡашмауы аҫтынан һомғол һынына һарылып төшкән оҙон сәс толомдары ике ҡара йылан һымаҡ ялтырай. Кескәй ҡолаҡ остарына таҡҡан алтын алҡалары яңы тыуған ай шикелле күҙҙе иркәләй. Көмөш беләҙектәр менән биҙәлгән беләктәре аҡҡош ҡанатындай. Бармаҡ тәлгәшкәйҙәренең остарынан ҡына гөлдәр тамып торған төҫлө. Атлап йөрөүҙәре аҡҡош йөҙөп килгәндәй. Ауыҙ асып һүҙ әйтһә, наҙланып, шишмә шылтырап аҡҡан кеүек. Йыр йырлаһа, кешеләр баҫҡан ерҙәренән ҡуҙғала алмай. Шундай һылыу ул Аҫыл ҡыҙ, һәр егеттең күңелен елкендергән ҡыҙ!..»

Ғөмүмән, һылыуҙарҙан һылыу — ул төҫ-буйы камил, йөҙө айҙай яҡты, бер күреүҙән күңелгә ятышлы, ожмах фәрештәһеләй, йәннәт хурылай гүзәл ҡыҙ. Мәгәр тормошта ҡатын-ҡыҙҙың тышҡы яҡтан ғына түгел, эске яҡтан да матур — күңеле яҡшы, нурлы булыуы зарур. «Аҡбуҙат» эпосында Нәркәс Һәүбәнде Мәсем хандың ҡыҙы Айһылыуҙы һорарға, ханға кейәү булырға өгөтләгәс, егет уға былай ти:

...Миңә әйтсе бер һүҙең,
Кер ҡалдырма, һылыуҡай,
Һине һөйһәм ни була
Күңелем яттан алдырмай!
Күктең айы һылыуҙа,
Ҡояш һөйгәс йөҙөнән,
Ҡояштан нур алғанға
Гөл үптермәй үҙенән.
Айһылыуҙың йөҙө лә
Тыштан ғына көлһә лә,
Күңеле нурҙы бумаһа,
Айҙай ғына булыр ул.

Йәшәйештә күп һыналыуынса, ир-егет менән ҡатын-ҡыҙ мөнәсәбәтендә ҡиәфәттән тыш холоҡ-ҡылыҡ, күңел ятыу, күңел зауығы һәм йылыһы, эске рухи донъя ла ҙур әһәмиәткә эйә. Халыҡ әйткәнсә, холоҡлоноң күңеле хуш, ҡыҙ байлығы — күркәм холоҡ, матур ҙа булһын, батыр ҙа булһын... Кәләш йәрәшкәндә ҡатын-ҡыҙҙың инсафлығы, төрлө һөнәрҙәргә маһирлығы, ҡул оҫталығы, эшһөйәрлеге, егәрлелеге лә күҙ уңына алына.

Ҡыҙ һылыулығының мәртәбәһе уның һыбай йөрөүгә, йыр-моңға, нәфис һүҙгә, бейеүгә һәләтлелеге менән тағы ла күтәрелә. «Ғилмияза» риүәйәтендә[12] сағылыуынса, матур, асыҡ йөҙлө, алсаҡ күңелле Бөрйән ырыуы ҡыҙы Ғилмияза эш эшләгәндә лә, уйнағанда ла һәр саҡ йырлаған, көйләгән, йә таҡмаҡ әйткән; йырсылар, сәсәндәр менән бер рәттән йыйындарҙа ҡатнашҡан, улар араһында өҫтөнлөк алған. «Таштуғай» риүәйәтендә[13] Көнһылыу балдаҡ атышта, ат өҫтөнән тәңкә атыу ярышында мәргәнлектә танылған. «Һуңғы йыр»ҙа[14] Гөлйемеш йырлап, бейеп бөтә тамашасыларҙың йөрәген елкендергән. «Ҡарасәс» риүәйәтендә[15] йыйында ҡатын-ҡыҙҙарҙың йыр, бейеү ярышында Байғужаның ҡурайҙа уйнай башлауы була, Ҡарасәс уға ҡушылып йырлап ебәрә, уның моңло тауышын ишетеп халыҡ таң ҡала. Ҡыҙ бейеүҙә лә беренселекте ала. Ҡарасәс менән Байғужаның даны тирә-яҡҡа тарала. Егет Ҡарасәсте йәрәшә, башлы-күҙле була.

Ғөмүмән, халыҡ ижадында ҡатын-ҡыҙ һәр йәһәттән камил, һоҡланғыс, хатта ысын булмышынан яҡшыраҡ, хыялдағы, аңдағы алиһәләй итеп, йәғни идеаллаштырып һүрәтләнә. Гүзәл заттар — ғәйәт тә һылыу, һөйкөмлө, саф күңелле, көслө рухлы, һөйгән йәрҙәренә һуңғы һулыштарына тиклем тоғро образдар.

Ҡыҙҙың һомғоллоғо, күҙҙәренең балҡып тороуы, ирендәренең бешкән сейә төҫлө булыуы, йөҙөнөң алһыулығы, йырға, бейеүгә, һыбай елеүгә маһирлығы уның һаулығы һәйбәтлеге билгеһе лә. Ә һаулығың — байлығың. Сәләмәт тәндә — саф аҡыл. Һау-сәләмәт ҡатын сәләмәт бала таба. Был иһә нәҫелде дауам итеүҙә һәм ишәйтеүҙә бик тә мөһим.

Ир, ҡатын холҡона бәйле Василий Розановтың «Люди лунного света» китабында яҙылғандар бик тә ҡыҙыҡлы: «Ир менән ҡатын холҡо ҡапма-ҡаршы һәм шул арҡала бер-береһен тулыландыра. Улар ҡушылғанда — йәндәре лә ҡушыла... Идеалдағы ир-егет йәне, рухы: ҡаты, тура, ныҡ, ынтылышлы, алға хәрәкәт ҡылыусы, иғтибар итеүсе, ҡыҫырыҡлаусы, баҫым яһаусы, еңеүсе... Ҡатын-ҡыҙ холҡо, ҡылығы, ғүмере идеалы, ғөмүмән, йәне, күңеле һыҙаттары: нәфислек, яғымлылыҡ, мөләйемлек, йомшаҡлыҡ, ыңғайлыҡ, ыҡҡа килеүсәнлек, килешеүсәнлек... Йән, күңел ниндәй, енси органдар ҙа шундай. Асылда бына ошо космогоник төҙөлөштән улар бөтәһенән фәҡәт бер үҙҙәре уңдырышлы, нәҫелле һәм артабан мәңгелеккә «үҙ өлгөһө буйынса» бар итә, яралта».[16]

Беҙҙең заманда ла һылыулыҡ юғары баһалана. Әйтәйек, «Һылыуҡай», «Науруз гүзәле» тамашаларында, «Рәсәй супермоделе», «Бөтә донъя супермоделе» конкурстарында тәбиғәт иҫ киткес матурлыҡ (буй, һын, тән, сәс, теш) биргән ҡыҙҙар еңеүсе булып танылa. Модель булыр өсөн ҡыҙҙар гимнастика, бал бейеүҙәре менән дә шөғөлләнә, сит телдәрҙе лә өйрәнә.

## Атын белеү, танышыу

Борон башҡорттар яҡындан танышыу өсөн ят кешенән ил-йортон, ырыуын, ағасын, ҡошон, тамғаһын һораған. Ат кешнәшеп, кеше һөйләшеп танышыр, тигәндәр. Ҡыҙ йәрәшкәндә, ҡыҙ биргәндә туғанлашҡан яҡтың нәҫел-нәсәбен, тамырын, шәхси сифаттарын белешкәндәр. «Аҡбуҙат» эпосында Тарауыл ҡарт Һәүбәндән иҫәнлек-һаулыҡ, ер-һыуын, ауыл-ырыуын, оранын, ағасын, ҡошон, һауытын һораша. Һәүбән үҙ тормошон баштан-аяҡ энәһенән ебенә саҡлы һөйләп бирә.

Үҙеңде танытыу, танышыу күренеше эпостарҙа ентекле һүрәтләнә. «Урал батыр»ҙа һунар мәлендә ауланған Һомай атаһы Самрау, инәһе Ҡояш булыуын, уларҙың һәм үҙенең үҙенсәлектәрен тәфсирләп, йәғни аңлатып, төшөндөрөп бирә; Урал менән Шүлгәндең юл башын һорашып белгән ҡарт уларға Самрау иленең һәм Ҡатил батшалығының ниндәй икәнен әйтә; Урал урманда ҡасып йөрөгән ҡарсыҡ менән ҡыҙға кемлеген таныта; үлемгә юлыҡҡан Зәрҡум ярҙам өмөт итеп, һарай серен һөйләй; халыҡ араһынан бер ҡарт Ҡәһҡәһәлә тотҡон булған Алғыр батыр ҡыҙы Гөлөстанды Уралға димләй; Урал Һомайға үҙенең кемлеген, уй-ниәттәрен белдерә; батырҙың яҡшылығын төшөнгән Айһылыу уға серен сисә; Айһылыуҙы алып килгәс, Һомай үҙе Һомай икәнен, Уралды белгәнен, барын һөйләп аңлата; Яйыҡ, Иҙел, Һаҡмар Уралға (ул яуға сыҡҡанда яңы тыуған улдары ла ат менерҙәй ир булған) килеп сәләм биреп, үҙҙәрен таныта. Уралды иһә халҡы ергә ырыҫ сәстергән, илгә байман таптырған ҡашҡа тип белә. Яйыҡҡа атаһы Урал тураһында халыҡ былай тип һөйләй:

Атаң беҙгә тәңреләй
Ярҙам итте, балаҡай.
Атаң хаҡын һаҡлайбыҙ,
Инәң хәтерен һаҡлайбыҙ,
Һин — атаңдан ҡот йыйған,
Һин — инәңдән һөт имгән,
Аларға уртаҡ бала һин,
Беҙгә дана бала һин.

Аҡбуҙат эпосында Һәүбән һыуҙа йөҙөп йөрөгән алтын йөнлө өйрәкте тотҡас, ул телгә килеп, шулай ти:

Егет, атҡан һунарың —
Өйрәк түгел, белһәң һин,
Күлдә йөҙөп уйнаған
Данлы Шүлгән батшаның
Йәндәй күргән ҡыҙы мин.

Артабан өйрәк түгел, сәсен тарап ултырған ҡыҙ килеш тап иткәс, Һәүбән уға атын һорап өндәшә:

Һылыу, әйтсе атыңды,
Бер һөйләрмен дан итеп.
Йә бумаһа ҡайтайыҡ,
Бергә торайыҡ көн итеп.

Нәркәс Һәүбәнде танып белмәҫ, кешелеген һынамаҫ элек атын әйтмәй, «ер улына тиң бумаҫ, нурҙан тыуған ҡыҙ бала», ти. Һәүбән һыу ҡыҙының бүләге Аҡбуҙҙы алып, илен азат иткәс, күп шатлыҡҡа юлыҡҡас, һылыуҙың

теләгән белергә, ысын күңелен асып, һөйләр һүҙен тыңларға килгәс, Нәркәс һис асыуланмай күлдән сыға һәм серен сисә:

Ҡыҙ буһам да инәнән
Ирҙәй батыр тыуҙым мин;
Урал буйы ерендә
Күп батырҙар күрҙем мин;
Һинең бабаң Яйыҡты
Көс һынауҙа еңдем мин;
Төҫөм йәштәй буһа ла,
Күп йыл ғөмөр иттем мин.
Батша ҡыҙы буғанға,
Ергә сығып баҡмағас,
Унан ашап-еймәгәс,
Һис ғөмөрөм уҙманы,
Ҡарттыҡ мине еңмәне,
Йәш ҡыҙ булып һаҡтанып,
Һылыуҙығым бөтмәне.
Йөҙөм асһам, ҡояшың
Оялып болотҡа инәр.
Кемдәр күрәш теләһә,
Уға йөҙөмдө асһам,
Күҙе ҡамашыр нур мән,
Йығылып уҡ хур булар.
Һиңә йөрәк асманым
Һине тәүләп күргәс тә,
Күңелемдән һөйҙөм мин,
Һиңә әйтергә ҡыйманым,
Аҙаҡ сикте көттөм мин.
Әгәр мине тиң итһәң,
Үҙеңә буй бирәйем,
Уралыңда тиң ғөмөр
Һине мән һөрәйем.

Нәркәс йөҙөн асып, Һәүбәнгә ҡарап йылмайған. Йөҙөнөң һылыулығын күреп, егет ғәжәп ҡылған. Һәүбән алырға риза булғас, атаһының бөтә мал-тыуарын сығарырға ҡушҡан. Күлдән ер ҡаплаған ҡола йылҡы сыҡҡан. Һәүбән менән Нәркәс бөтәһен дә ат-тупһыҙ халыҡҡа таратып биргән...

«Заятүләк менән Һыуһылыу» эпосында Заятүләк көнсөл ағаларынан ҡасып, Асылыкүлдең матурлығына хайран ҡалып ҡарап торғанда һыу ҡыҙын күреп, толомонан тотоп, уға былай ти:

Йондоҙ юлап төн буйы
Ялһыҙ елдем, һылыу ҡыҙ.
Атың, илең белмәйем,
Әйтеп бирсе, һылыу ҡыҙ.
Икәү бергә булайыҡ,
Бергә тормош ҡорайыҡ.

Ҡыҙ әйтә:

Сибәр егет, шаулама,
Атым минең — Һыуһылыу.

Мине һорап даулама,
Егет һиңә тиң бумам:
Нурҙан тыуған тоҡоммон,
Ерҙә йөрөтөп хурлама.
Ер улына тиң бумаç
Нурҙан тыуған ҡыҙ бала.

«Һинең менән булайым, һинең өсөн үләйем», — тип ныҡышҡас, алтын тараҡ, алтын сәсмәү бүләгенән дә баш тартҡас, Һыуһылыу йомшара, Заятүләкте иленә алып ҡайта, туғай уртаһында ултырған апаҡ кейеҙ тирмәһенә индерә лә: «Егетем, теләгеңә ирештең: мин һинеке, һин минеке булдың!» — ти. Теләгеңә ирешеү өсөн өмөттө өҙмәй, ҡыҙҙың күңеленә юл таба белеү, уның менән мөғәмәлә итеү маһирлығы ла кәрәк икән.

Халыҡ ижадында еткән ҡыҙҙарҙың һәм егеттәрҙең ҡымыҙлыҡҡа, еләккә сыҡҡанда, йыйындарҙа, йәйләүҙәрҙә осрашып танышыуы, ғашиҡ булыуы тасуирлана. «Ҡумыҙ» риүәйәтендә сағылыуынса, ҡымыҙлыҡҡа сығыу йәштәрҙең байрамына әйләнеп киткән. Унда төрлө уйындар уйнағандар, йырлағандар, бейегәндәр, ҡурай тартҡандар. Бикбай исемле егет, сағандан ҡумыҙ эшләп, бейеү көйҙәре уйнап, йәштәрҙе бейеткән. Байҙың оло ҡыҙы Гөлйөҙөм унан күҙен алмай ҡарап тора. Бикбайға ла ҡыҙ оҡшай. Үҙенең һөйөү билдәһе тип ул Гөлйөҙөмгә ҡумыҙын бүләк итә.

«Көнһылыу» риүәйәтендә[17] йырға ла, бейеүгә лә шәп иç китмәле һылыу Көнһылыу ҡурайсы егет Арыçланға йыйында ғашиҡ була. Йылҡы һуйып, Әй буйындағы йәмле тәбиғәттә ҡаҙан аçҡандар. Йәштәрҙең берәүҙәре көрәшкән, берәүҙәре йүгерешкән, ат сабыштырған. Көнһылыу аҡ сатыр аçтында аҡ кейеҙ өçтөндә ҡарап ултырған. Ярышта Арыçлан тигән егет еңеп сыҡҡан. Ул Йосоп пәйғәмбәр кеүек матур булған. Көнһылыу уға «Көнһылыу» тип яҙылған ебәк яулығын бүләк иткән. Улар бер-береһенә ҡарап йылмайышҡан. Арыçлан да Көнһылыуҙы бер күреүҙән яратҡан, һәр ваҡыт уны уйлап йөрөгән.

«Ҡара юрға» әçәрендә ҡыйыу, һүҙгә сәсән Маҡтымһылыу Әбләйҙе күреп, танышыр-белешер алдынан иғтибарға лайыҡ һорауҙар ҡуя:

Сит йәйләүҙең кейәүе
Ҡайтып килә, тир инем, —
Кискә һарҡҡас, кейәүҙәр
Кәләш ташлап ҡайтырмы?..
Ҡыҙ ташлаған кейәүҙер
Ҡайтып килә, тир инем, —
Бынауҙай ат мегән ир
Һайламай ҡыҙ һөйөрмө?..
Төнлөк бауы ҡағыуға
Ҡыҙ күҙләйҙер, тир инем, —
Күҙ бәйләнмәй, кис булмай
Егет тағы йөрөрмө?..

Әбләйҙең үҙен таныштырыуынса, ул яусы ла, ҡан даулаусы ла, үткенсе лә, иргәйел ир ҙә түгел, ә күңеленә хуш бер һылыуҙы эҙләүсе Һаҡмар һыуы буйынан ҡурайсы, көрәшсе егет.

## Арбау. Һөйөү белдереү. Вәғәҙәләшеү

Йәшәйештә әүәл-әүәлдән ҡыҙҙы, килендә, егетте, кейәүҙе, ғөмүмән, кешене, тере йәнде арбау күренештәре күҙәтелә. Мөхәббәт юҫығында был айырыуса мөһим. Күҙең төшкән ҡыҙҙы, егетте үҙеңә ҡаратыу, ыңғайлатыу, әүрәтеү, күңелен биләү өсөн тылсымлы һүҙ, сихри ҡөҙрәт менән тәьҫир итеү, яҡшылығыңды, батырлығыңды танытыу зарур. Дәртле егет тәүәккәллек ҡылып, йән һөйгәнен арбай, йәнәшәһе итә, йәре йән аҙығы була. Оялсан егет иһә оҙаҡ ваҡыт үҙенә йәр таба алмай ыҙалай. Ә бит алыусыға барыусы бар. Һис шикһеҙ, һөйгән һөйгәнен ала, һөйгән һөйгәненә бара.

Тормошта яман уй менән арбау осраҡтары ла осрай. Әйтәйек, «Урал батыр» эпосында туғыҙ башлы ҙур йылан, ҡыҙ төҫөнә инеп, Уралды арбамаҡсы, һәләк итмәксе итә. Аҡбуҙатты алыу, уға эйә булыу өсөн Әзрәҡә батшаға Һомайҙы арбау ҡеүәһенә эйә ир кәрәк. Ә үҙе егетте ҡыҙ, мал биреп, йә бей ҡылып арбамаҡсы:

Хәҙер беҙгә шул кәрәк:
Кеше булған ир кәрәк,
Ҡояш ҡыҙы Һомайҙы
Арбай алыр ир буһын,
Ҡыҙ яратып егетте,
Аҡбуҙ мән булатты
Бүләк итерҙәй буһын.
Буҙ ат менер ир тапһаҡ,
Ҡыҙ теләһә, ҡыҙ биреп,
Мал теләһә, мал биреп,
Бей булам тип ымһынһа,
Берәй илгә бей ҡылып,
Ул егетте арбаһаҡ —
Беҙ Уралды еңербеҙ...

Шулай итеп, арбау — ниәтеңә, теләгеңә ирешеүҙә йоғонтоло, ҡөҙрәтле көс. «Аҡбуҙат» эпосында ла Буҙатты бирмәҫ өсөн Һәүбәнде һылыу ҡыҙ менән әүрәтмәкселәр:

Батшам, һиңә бер аҡыл:
Һарайың тулы ер ҡыҙы,
Һинең ҡыҙҙан да һылыу
Мәсем хандың бар ҡыҙы.
Уны күрһә, егетең
Аҡбуҙатын онотор,
Бер ауыҙһыҙ алам тип,
Егет шуға ынтылыр.

Урал иһә изгелеге, яҡшылығы, ярҙамсыллығы, батырлығы, ил ҡотҡарыр уйы менән Һомайҙың күңелен биләй. Халыҡ ҡарашынса ла, ир эше менән, ҡыҙ ҡылығы менән һөйкөмлө; яҡшы ир менән ҡатын хур булмай; яҡшы ҡатын — ярты ырыҫ. Шуға ла Һомайға ир аҫылы Урал һиммәтле. Ә бит «арабыҙҙа яман уй, ҡанға батыр яман туй булмаҫ ул», тип уйлап, Шүлгән дә Һомайға һөйөүен белдерә:

Һарайыңа килгәс тә,
Күҙ алдымда күргәс тә,

Күңелемде арбаның,
Күҙең миңә һалманың...
Асыҡ йөҙөң күргәс тә,
Барын хәҙер оноттом.
Һиндәй һылыу бумаç тип,
Эҙләп һис кем тапмаç тип,
Миңә ҡулын бирерме,
Үҙе һөйөп килерме? —
Тип күңелем елкеттем.
Теләһәң, бергә булайым,
Һөйһәң, һине алайым,
Ҡарыулашһаң тағы ла,
Үҙ уйымды ҡылайым.

Һөймәгәнгә һөйкәлмә тигәндәй, Һомай серен сисмәй, Шүлгәнгә буй бирмәй. «Аҡбуҙат» эпосында һыу ҡыҙы Нәркәс үҙен йәр итергә теләгән Һәүбәнгә йөрәген аса, уны тәү күреүҙән күңеленән һөйөүен әйтә.

«Кара юрға» эпосында Әбләй һөйөүен Маҡтымһылыуға белдермәй, сер тотоп, хәҙер яусылай башлаһа, ҡалымға малы юҡлығын уйлап аптырай. Әбләй ҡайтырға атын эйәрләй башлағас, Маҡтымһылыу, нисек тә Әбләйҙең үҙен яратҡанын белеү өсөн уға бүләк бирергә булып, былай ти:

Нағышлы билбау теккәнмен,
Быуайымсы биленә.
Аçа балаç һуҡҡанмын,
Түшәйемсе юлыңа.

Әхирәт ҡыҙҙар ҙа ике йәш йөрәктең ҡауышыуын теләй:

Шаң-шаң ҡойоп балдарҙы
Туйығыҙҙы көтәйек,
Ҡуй майына һыҙҙырып,
Йыуасалар бешерәйек.
Килсе, егет, билеңде
Вәғәҙә өсөн быуайыҡ.

Һөйөү — үтә лә тәрән хис-кисереш, тойғо, мөхәббәт, бөтә күңелдән ғашиҡ булыу, онотолоп яратыу. «Заятүләк менән Һыуһылыу» эпосында Һыуһылыуға иçе китеп ғашиҡ булған Заятүләк бергә булыу, тормош ҡороу өсөн Аҡ шоңҡарынан да, Күк толпарынан да, күкрәк һөтөн имеҙгән инәһенән дә, атаһынан да биҙергә, хатта ки һыуға төшөп үлергә риза. Халыҡ әйтеменсә, һөйгән йәр — һөйәгең елеге, мөхәббәт таш ярҙырта, мөхәббәт өсөн йән фиҙа. Бына ниндәй көс-ҡөҙрәткә эйә ул мөхәббәт.

«Таштуғай» риүәйәтендә[18] йыйындарҙа мәргәнлеген таныҡкан, ҡурай тартҡан Байғүбәк үҙенең матурлығы, йырсылығы менән дан алған Көнһылыуға шишмәгә һыуға барғанда һөйөүен йыр менән еткерә:

Урал япраҡтары япраҡ түгел,
Һандуғасҡайҙары ла ҡош түгел.
Көнһылыуҡай матур, алсаҡ күңел,
Уға берәү Уралда тиң түгел.
Көтөр батыр тирмә алдарында
Ат бағаналары ла буш түгел.
Уғым менән атып та алыр инем,
Көнһылыуҡай ыласын ҡош түгел.

Уға ҡаршы Көнһылыу шулай йырлай:

Ат бәйләйҙәр ҡаҙыҡ, ай, булғанға,
Саңлаталар даны киткәнгә.
Моңая ла берәү, торғай һалып,
Тиң табалмай йөрәге типкәнгә.
Батыр егет яуҙан, ай, ҡурҡамы,
Ат ҡушаҡлап сапмай ятырмы?
Буш оялар көткән кәкүк ҡоштай
Ҡыҙ әйтеүен егет көтөрмө?

Шул саҡ Байғүбәк ҡулындағы балдағын Көнһылыуға бүләк итеп бирә, егет алырға, ҡыҙ барырға һүҙ ҡуйыша.

Халыҡ ижадында ҡатын-ҡыҙ күңелен яулауҙа йырҙың йоғонтоло сара булыуы күҙаллана. «Ҡарасәс» риүәйәтендә[19] тол ҡалған Ҡарасәсте һоратып, тирә-яҡтан яусылар күп килә, мәгәр ул килгән берен кире бороп тора. Күҙгә-күҙ ҡарашып һөйләшеү өсөн бер ир Ҡарасәс янына килә һәм уны йыр менән әүрәтә.

Ир әйтә:

Ҡара сәскәйеңдең толомдарын
Өстән үреп сулпы таҡҡанһың,
Өс яусым да килеп кире ҡайтты,
Ҡабул итмәй кире ҡаҡҡанһың.

Ҡарасәс яуап бирә:

Яусыларың ҡайтты, һис ҡаҡманым,
Оялдым шул вәғәҙә бирергә.
Яусылатып барыр түгелмен ҡыҙ,
Теләһәм дә һине күрергә.

Ир әйтә:

Семәрле лә сана, сем үрәсә,
Рөхсәт итсе, үтәм түргәсә.
Вәғәҙәңде алһам, теләк була,
Булырбыҙ, тим, бергә гүргәсә.

Ҡарасәс әйтә:

Семәрле лә сана, сем үрәсә,
Үрәсәгә баҫып һөйләшә.
Һөйләшеүкәйҙәрең, һай, ғәҙәтсә,
Күҙ ҡарашҡайҙарың әҙәпсә.

Ир әйтә:

Урамдарҙан үтә юлдар түтә,
Семәрле лә сана көн дә үтә.
Һөйгән генә йәрең зирәк булһа,
Ғүмерҙәрең зәүерҙә үтә.

Ҡарасәс әйтә:

Төштәремдә күрҙем килереңде,
Әллә мин дә булдым күрәҙә.
Йондоҙлама һалдым, дөрөҫ төштө,
Инде, бәгерем, бирәм вәғәҙә.

Тол ир, тол Ҡарасәс туй уҙғарып, икенсе бәхеттәрен табып, донъя көтөп алып киткәндәр.

«Һуңғы йыр» риүәйәтендә һүрәтләнеүенсә, ун етешәр йәшкә еткән Кәрим менән Гөлйемеш бер-береһен яратыша. Ил эсендә «Кәрим Гөлйемеш өсөн, Гөлйемеш Кәрим өсөн тыуған инде», тип һөйләйҙәр. Уларҙың мөхәббәте көндән-көн көсәйә. Ғашиҡтар бергә тормош ҡорорға, тормоштоң шатлыҡтарын, ауырлыҡтарын бергә уртаҡлашып үткәрергә вәғәҙә бирешә.

Вәғәҙәләшеп ҡуйған ҡыҙҙы алыу, егеткә барыу борондан килгән ғәҙәт. Вәғәҙәле йәр — вәғәҙә бирешкән һөйгән йәр. Үтәргә инандырып, ышандырып әйтелгән һүҙҙе тотоу зарур. Халыҡ әйтеменсә, вәғәҙә — ярты иман. Әкиәттәрҙә батшалар үҙ вәғәҙәләре буйынса батырҙарға ҡыҙын да, ярты батшалығын да бирә.

## Һынау. Шарт ҡуйыу

Йәр һайлау үтә лә мөһим хәл-ваҡиға. Имен тормош ҡороу, етеш донъя көтөү, татыу ғүмер итеү өсөн ышаныслы йәнәш, иптәш кәрәк. Ҡылыҡ-тәбиғәтен асыҡлау, белеү өсөн егеткә, ҡыҙға һынау үткәрелә, уға бойомға ашырылырға тейешле шарт-талап ҡуйыла. Һынамай алма, һынамай барма, тигән боронғолар. Был — асылына оло мәғәнә һалынған бик тә фәһемле әйтем һәм аманат.

Халыҡ ижадында атай кешенең ҡыҙын ил батырына бирәм тигән нәҙере лә шарт ҡуйыу менән бәйле. Нәҙер теләктең, ниәттең ҡабул булыу шартына бәйләп әйтелә һәм уны әйтеүсе вәғәҙәһен, өҫтөнә алған бурысын үтәргә тейеш була. Мәҫәлән, «Аҡбуҙат» эпосында Мәсем хан ҙур туй яһарға оран һалып, аҡһаҡалдарҙы, мырҙаларҙы, батырҙарҙы, бар халыҡты йәйләүенә йыйып, майҙан уртаһына сығып шулай ти:

Майҙан йыйҙым ил дандап,
Ҙур ҡыуаныс буғанға,
Дейеү алған ҡыҙымды
Хоҙай азат ҡылғанға.
Ҡәҙер төнө буғандай,
Күңелем тулды шаттыҡҡа,
Нәҙер әйттем Хоҙайға
Ҡыҙым иһән ҡайтҡанға.
Ҡыҙымды бүләк итеп,
Тәхетемде һаҡтарҙай,
Шүлгәндән ҡон алырҙай,
Шул дейеүҙе үтереп,
Башын маң әпкилерҙәй
Батырға бирәм ҡыҙымды.

Ҡатын-ҡыҙҙы урлау, азат ҡылыу, иленә ҡайтарыу, батырға кәләш итеп биреү боронғо башҡорт, шулай уҡ башҡа ҡәүемдәр эпостарына һәм батырҙар тураһындағы әкиәттәргә хас күренеш. Был, моғайын, нәфис заттың тыуҙырыусы, түл йәйеүсе, нәҫелде ишәйтеүсе, дауам итеүсе роле менән дә аңлатылалыр.

Ил күрергә сыҡҡан, үлемдән ҡотолорға Йәншишмәне эҙләгән Уралға Һомай бөтә ҡош төҫөн үҙ өҫтөндә биҙәгән ҡошто эҙләп табырға шарт ҡуя. Егет ҡошто (Айһылыуҙы) тыуған иленә алып килә. Ҡыҙ Уралдың яҡшылығын тел төбөнән тоя. Һомай әүәл аҡҡош тунында

ауҙа ауланған мәлдә Урал уны ҡотҡарыу яғында була. Байтаҡ ваҡыттан иленә килгәс тә Һомай егетте таный, уның игелеген иҫләй:

Уралды ул күргәс тә,
Батырлығын белгәс тә,
Яҡшылығын һиҙгәс тә,
Уралға күңел бәйләгән,
Ул Уралды һайлаған.

Шүлгәндең дә күңел елкетеүен белгәс, аҡыллы Һомай уға Уралды һөйөү серен сисмәй, ҡырҡа яуап бирмәй, үҙенең шартын ҡуя:

Егет, уйың уй буһын,
Теләгеңә юл буһын,
Бер ҙур майҙан ҡорайым,
Батырлығың һынайым,
Шунда данын күрәйем.
Буҙ атым бар йыраҡта,
Инәм биргән бүләккә,
Майҙаныма шул киләр,
Батыр буһаң, ул беләр.
Майҙанымда Буҙатты
Ҡулыңа алып менәлһәң,
Булатыны алалһаң,
Шундай батыр булалһаң,
Буҙым бүләк ҡылайым,
Атама әйтеп туй яһап,
Үҙеңә йәр булайым.

Шүлгән ҡыҙҙың талабына күнә. Башҡа сара юҡ. Аҡбуҙ толпар атлығып килә. Бығаса ул батырҙарҙы ырғытып, береһен һанға алмаған. Әле кемде (Шүлгәндеме, Уралдымы) һынап, үҙенә юлдаш, иптәш ҡыла, шул Һомайға һөйгән йәр була. Аҡбуҙҙы менергә баҙнат итер өсөн егет тәүҙә көсөн һынарға, етмеш батман ауырлыҡты күтәреп күккә сөйөргә тейеш. Шүлгән уҡталып, һәрмәнеп, ҡутарырға серәнһә лә, көсөргәнеп маташһа, айҡашһа ла, етмеш батман ташты ҡуҙғата алмаған. Урал иһә уны йоҙроҡлап һуғып тәгәрәтеп, ҡулына алып, башта һауаға, шунан Әҙрәкә иленә атҡан. Буҙат килеп Уралға баш эйгән, буйһонған. Шул саҡта Самрау батша ла: «Кейәүем бул!» — тип, уға ҡул биргән. Бөтә илде йыйып, ҙур туй ҡорғандар, ил батыры булһын, тип, Уралға дан биргәндәр.

Һынап барған, яҡшыны юлдаш иткән йәр менән генә тормош күркәм, ҡотло, ҡыуанıслы. Дейеү урлап, ҡурҡытып, унан һуң Урал ағаһын ҡыҙғанып, яҡшыға дошман булған Шүлгәнгә димләп бирелгән Айһылыуҙы иһә һары ала, күңелен ҡайғы баҫа, йөҙөнөң нуры кәмей. Ике батыр кейәүем ил өҫтөндә терәгем булыр тип шатланған, Шүлгәнгә туй яһарға күнгән, мәгәр унан алданған Самрау ҙа хурлана, ҡайғыһынан күҙҙән юғала. Айһылыуҙың һөйгәненә бүләк итер Һарысай аты ла Шүлгәнгә бирелмәй, туйы аман булмай.

Шулай итеп, аҡыллыға ишара: һәр ҡыҙылға ҡыҙыҡма; ат алһаң — ауылың менән, ҡыҙ алһаң — ырыуың менән кәңәшләш; атаһын күр ҙә — улын ҡос, инәһен күр ҙә — ҡыҙын ҡос; ҡыҙ һайлаһаң, күҙеңдән бигерәк ҡолағыңа ышан; белеп һөйһәң — йәр, белмәй һөйһәң — ҡар;

ҡоҙа булғансы — ныҡ һораш; ҡыҙ яҡшыһы ҡылыҡтан билгеле; сәскәһенә алданып, сәнскеһенә ҡаҙалма; теле — бал, күңелен ҡарап ал...

Уралдың Аҡбуҙҙы, алмас ҡылысты, серле таяҡты ҡулға төшөрөүе, Йәншишмәне уртлағаны, тирә-яҡҡа һипкәне — ер йәнләнеп киткәне, һылыуҙарҙан һылыуға өйләнеүе уның батырлығының, данының, бәхетенең асылдары булып тора.

## Ризалыҡ алыу

Ғүмерлеккә йәр һайлағанда, ғаилә ҡорғанда ололарҙың һүҙен ишетеү, ҡарашын белеү, ата-инәнең, ҡәрҙәштәреңдең ризалығын, фатихаһын алыу бик мөһим изге йола. Һомай атаһына барып, уға бар уйын йәшермәйсә әйтә. Самрау батша ҡыҙына шундай кәңәш бирә:

Һөйһәң, ҡыҙым, барырһың,
Аҡбуҙ атың бирерһең.
Яҡты донъя йөҙөндә
Рәхәт торорһоң, балам,
Уралдай уҡ батырға
Йәнәш булырһың, балам.
Урал батыр хаҡына
Шүлгәнде лә сығар һин,
Бөтә илде саҡыр һин,
Батыр ирҙе туйла һин,
Һис берәүҙе ҡалмаһын —
Барын йыйып һыйла һин.

Һомай атаһы һүҙен тыңлаған, бөтә илде йыйнаған. Шүлгән иһә яһилланып, Самрауҙың ҡыҙын, Аҡбуҙатын тартып алмаҡсы. Мәгәр Урал кешегә һис яуызлыҡ ҡылмаған, дошман булмаған илгә яу асыуға ҡырҡа ҡаршы. Ниәткә яҡшылыҡ менән өлгәшеү хәйерле. Ҡыҙ алыу уның ризалығына, һине яратыуына бәйле:

Ҡыҙ алырға уйлаһаң,
Аҡбуҙатын һайлаһаң,
Ҡыҙы һөйһә, ҡыҙын ал,
Бүләк итһә, атын ал.
Ҡыҙ алам тип, яу асып,
Үлемгә беҙ юл ҡуйып,
Бушҡа тиктәҫ ҡан ҡойоп,
Яуыз исем таҡмайыҡ.

Тимәк, һөймәгән йәр түгел, һөйгән, йән теләгән генә — йәр, күңеле яҡҡан, тартҡан ғына хуш. Яҡшы егет, яҡшы ҡыҙ йөрәге тойоп табыша, үҙ иткәнде пар итә, айырылмаҫҡа ҡауыша.

«Аҡһаҡ ҡола» әҫәрендә[20] ауылдан-ауылға, йәйләүҙән-йәйләүгә йөрөп, күп ерҙәрҙе гиҙеп, мөһабәт кәүҙәле егет аҡ тирмәләр теҙелеп ултырған йәйләүгә барып сыға, селтәр-ҡашмау кейгән бер һылыу ҡыҙҙың сылтырап аҡҡан йылғанан һыу алып торғанын күреп, уның янына барып туҡтай, иҫәнләшә. Нәҙекәй билле, зифа буйлы һылыу егеткә бер һирпелеп ҡарай. Егет уның һылыулығына таң ҡала һәм күңелендә мөхәббәт тойғолары уяна. Ҡыҙ ҙа егеттең мөһабәт, ғорур һынын күреп һоҡлана, уға ғашиҡ була. Ошо саҡ егет һүҙ башлап, үҙенең Бөрйән ырыуынан

булыуын, юғалған йылҡыларын эҙләп йөрөүен әйтә. Ҡыҙ егеткә һамаҡлап, үҙенең егет йортона төшөргә риза булыуын аңғарта. Егет атынан төшөп, ҡыҙҙың ҡулынан бер сүмес һыу эсеп, алһыу алма кеүек битенән үбеп, кәләш итеп алам, яусы ебәрәм, ти. Иленә ҡайтҡас та һөйгәненә яусы ебәрә, бер өйөр ҡара-ҡола йылҡы биреп, ҡыҙҙы кәләш итеп әйттерә. Шулай итеп, ике ырыу башҡорттары ҡоҙа булыша, туй үткәрә, туғанлаша.

«Ҡуңыр буға»ла[21] егет Янбай ағайҙан ҡыҙы Ҡолансәсте биреп, үҙ бауыры яһауын һорағас, ул: «Ҡыҙ ата-инәнән тыуа, икеһенең дә уртаҡ бәғере була. Ундай уйың булғас, кәңәш-төңәш итәйек», — ти. Ағай-энеләр менән кәңәш итеп, арала уй-ҡараштар төрлөләнгәс, атаһы ҡыҙына яуапты үҙенә бирергә ҡуша. Ҡолансәс иһә: «Егет ат биреп, Урал ҡыҙын Урал егеттәренән һалдырып алдым, тип күперәймәһә, көндәш көлө менән көнөмдө уртаҡлап, сәскәнән-сәскәгә осҡан иңкеш төҫлө, атын бәйләгән бер йәйләүҙә ҡыҙ күҙләмәҫ булһа, ил аяғынан төбәп килгән бер егет икән, наһары ҡоромаһын, мин риза», — тип әйтә.

«Ҡара юрға»ла егет булып атының данын таныҡкан Әбләй бөтә йыйылған халыҡ алдында төрлө һөнәргә эйәлеген күрһәтә: ат өҫтөндә уйнап, көрәшеп, уҡ атып, йырлап, ҡурай тартып барын да таң ҡалдырғас, Мәсем ҡыҙын егеткә бирергә ризалашып, ҡунаҡ булырға тирмәгә инә.

## Бүләк

Халҡыбыҙҙа туғаныңды, ҡәрҙәшеңде, йәнкәй-йәнәшеңде ҡыуандырыу өсөн изге теләктәр менән бүләк бирелә. Һөйгән ҡыҙға, егеткә, туйҙа ҡоҙа-ҡоҙағыйҙарға бүләк биреү йолаһы бик борондан килә. «Урал батыр» эпосында ҡыҙҙың батыр егеткә инселәгән бүләге, уның тәғәйенләнеше башҡасараҡ. Урал ҡуйған шартты үтәһен, маҡсатына ирешһен, теләгәнен тапһын, яуыз көстәрҙе еңһен өсөн Һомай уға Аҡбуҙ толпар менән булат ҡылыс бирә:

Утҡа төшһә, янмаҫтай,
Һыуға төшһә, батмаҫтай,
Ел дә ҡыуып етмәҫтәй,
Тауҙан-таштан өркмәҫтәй,
Ир-егеттән бүтәнде
Үҙенә тиң күрмәҫтәй,
Типһә, тау-таш сорғотоп,
Сапһа, диңгеҙ ярырҙай,
Ауырлыҡта, тарлыҡта
Һиңә юлдаш булырҙай,
Күктә тыуып, күктә үҫкән,
Ерҙә тоҡом йәймәгән,
Әҙрәкәнең дейеүе
Мең йыл ҡыуып тотмаған,
Инәйемдән бирелгән,
Донъялағы йөрәгем —
Үҙем һөйгән егеткә
Бирә торған бүләгем —
Аҡбуҙ толпар булыр ул.

Шуны һиңә бирәйем.
Йөҙөн тут һис баҫмаҫтай,
Һис бирәү кәр ҡылмаҫтай,
Утҡа ҡаршы — ут булыр,
Һыуға ҡаршы — һыу булыр,
Ен-дейеүҙең барыһын
Үлемендәй ҡурҡытыр,
Ҡуй-һарыҡтай өркөтөр
Булат ҡылыс бирәйем.

Самрау батша ҡыҙы Айһылыуҙың да үҙен тиң күрер, бергә ғүмер ҡорор егеткә бирер бүләге — ат, Һарысай тигән ат:

Егет, тыңла һүҙемде,
Асыҡ күрҙең йөҙөмдө,
Айһылыу тигән атым бар,
Илде тотҡан атам бар,
Һөйгәнемә бирерҙәй
Һарысай тигән атым бар, —
Һыу теләһәң, һыу табар,
Яуҙа юлдашың булар.

Мәгәр Урал Айһылыуҙың икәү бергә булыу, йәшәү, бүләген алыу, илендә ҡалыу теләгенән баш тартырға мәжбүр. Сөнки ул — Һомайҙың һөйгән егете, уның бүләгенең эйәһе. Бүләк иһә бик үҙенсәлекле: ир-егетте ҡуллы, юлдашлы, затлы ҡылыр, арыҫландай батыр, ҡоштай ҡанатлы итер ат һәм яманларҙың барыһын үлемендәй ҡурҡытыр тылсымлы ҡылыс. Ләкин «Урал үҙен һөйгәнен асыҡ томайсы, тел төбөн белмәйсе, Аҡбуҙатты биреүҙән Һомай тәүҙә эс тартҡан».

«Аҡбуҙат» эпосында Нәркәс тә Һәүбәнгә мал ҡото — Аҡбуҙҙы, өйөр-өйөр йылҡы, һауымы еткән һыйырҙар, алпандап баҫыр ҡуй бирергә вәғәҙә итә, антын үтәп, атаһынан бүләк талап итә:

Ни теләһә егетем,
Бүләгең бир малыңдан,
Булһын бүләк оҡшарлыҡ.
Инде малың ҡыҙғанһаң,
Үҙем барыр уйым бар.

«Мәхүбә» риүәйәтендә[22] йыйында йөҙөк аша уҡ атҡан мәргән егеткә бүләккә эйәрле йүгерек Аҡбуҙат инселәнә. Берәү иһә: «Йәнемдәй күргән ҡыҙым бар. Еңгән егеткә Мәхүбәмде бирәм», — ти. Айбулат исемле егет алдын сыға. Уға Аҡбуҙатты килтереп тотторалар. Мәхүбәнең атаһы: «Вәғәҙә — иман тотҡаһы. Вәғәҙә билдәһе итеп билғауымды бирәм. Кейәү булып килгәнеңдә билеңдә булһын», — ти. Ҡыҙ яулыҡ осо менән битен ҡаплаған килеш егеткә оялып ҡына ҡул бирә. Айбулат тәүәккәлләп яулыҡты тартып аса, ни күҙе менән күрһен: ҡаршыһында сөм ҡара күҙле, ҡыйғас ҡашлы, ай кеүек түңәрәк йөҙлө, армытлап үрелгән ҡуңыр сәсле, зифа буйлы ҡыҙ тора... Мәхүбә егеткә вәғәҙә бүләге итеп сигелгән ебәк яулыҡ бирә. Айбулат бәйгелә иҫтәлек итеп алған йөҙөктө Мәхүбәнең бармағына кейҙерә.

«Үткән ғүмер» риүәйәтендә[23] әйтелеүенсә, Тамъян-Катай ырыуынан бер бай үҙенең улына Үҫәргән ырыуының һылыу ҡыҙын йәрәшә. Ки-

лешкәндәр, ярашҡандар, туй көнөн билдәләгәндәр. Кейәү буласаҡ егет атаһының бынамын тигән толпарын менеп килә. Тирә-яҡта уны уҙырлыҡ йүгерек осрамаған. Мәгәр ул күҙегеп үлеп ҡуя. Был хәлде егет ауыр кисерә. Ҡыҙҙың атаһы ҡоҙаларға меңләгән сапсанды күрһәтеп, былай ти: «Араһынан күңелегеҙгә оҡшағанын һайлағыҙ. Шуныһын кейәүемә бүләк итермен». Оҡшаған ҡолондар толпар булып етешкәс, уларҙы ҡыҙы менән кейәүенә тотоп бирергә ҡуша.

Тува халҡы туй йолаһында йәмғиәттә инә өҫтөн дәүерҙә ҡыҙҙың инәһенә ҡолонло бейә, ата хакимлығы осоронда атаһына ат бүләк иткәндәр. Егет яғы иһә бүләккә быҙаулы һыйыр бирергә тейеш булған.[24]

Шәреҡ ҡәүемдәрендә, шулай уҡ башҡорттарҙа, ҡаҙаҡтарҙа байтаҡ йолалар, уйындар, тамашалар атҡа бәйле. Әйтәйек, «Атта уҙышыу», «Ҡыҙ ҡыуыу» кеүек бәйгеләрҙә ир-егеттә, ҡыҙ-ҡырҡында сослоҡ, етеҙлек, һығылмалылыҡ, ҡыйыулыҡ тәрбиәләнгән. Бәйгелә ҡыҙҙы еңгән егет кенә уға өйләнә алған. Йылҡы — малдың батшаһы, аты бар — арыҫлан, ир ҡанаты — ат итеп ҡабул ителгән. Ат ҡото, ат һөйөү, атты ҙурлау ғәҙәткә кереп, ҡанға һеңеп, беҙҙең көндәргә тиклем килеп еткән.

Тажиктарҙа борон етеш туйҙарҙа туй бүләге итеп ҡыҙҙың атаһына ат, инәһенә иһә һыйыр бирелгән (һыйыр биреү инәйҙең ҡыҙын имсәк һөтөн имеҙеп үҫтереү әжере булған). Инәй һыйырҙы, йәки уның тәүге быҙауын ҡыҙына бүләк иткән.[25] Халҡыбыҙҙың «Ҡуңыр буға» эпосында Янбай ҡыҙы Ҡолансәсте кейәү йортона оҙатҡанда: «Балам, ризығың алыҫҡа сәселде. Айыры тояҡтан инсе бирһәк, барып етә алмаҫ, йылҡынан ғына бирәйек», — тигәс, инәһе риза булмай һыйыр ҙа инселәй: «Исмаһам, елен тултырып, яландан мөңрәп ҡайтҡанда, илен иҫкә төшөрөп, һәү-һәүләп ҡаршы алыр. Таң менән һауып, һәш-һәшләп ҡыуыр. Гөбөрләтеп һауғанда үҙ иленең һөт еҫтәрен еҫкәп ултырыр. Май таҫҡағанда һыйырының майы менән ҡолан сәсен ялтыратып тарар, ҡәйнә күҙенә тилмереп торғансы, һыйыры быҙаулағас, ыуыҙ ҡоймағы ҡойоп, килен-киртән йыйып күңел асыр. Буйға ҡалып, әсеһерәп, аш көҫәгәндә ҡоротон ашар. Атаһы, айыры тояҡтан бер генә һыйыр булһа ла бирәйек». «Ҡуңыр буға»ның версияһында Таңдысаға инәһе Өһәбикә, атаһы Өлкәр бүләк итеп биргән һыйыр күп йортҡа төҫ, ҡот була. Таңдыса иһә ата йортона бүләк-ҡот булһын тип, Ҡуңыр буға менән килгән күк үгеҙ быҙауҙы ҡалдыра. Быҙауҙы мал күрке өсөн суҡлап, Таңдысаға имен-аман юл теләп ҡалалар.

## Ҡот алыу. Түл йәйеү

Халыҡ ижадында батыр егет менән гүзәл ҡыҙҙың ҡушылыуы, түлләнеүе иғтибарға лайыҡ күренеш. Әкиәттәрҙә егет тәүҙә ике-өс башлы дейеү урлап алып килгән, баҡыр йортта көн иткән ҡыҙҙы ҡотҡара, уның менән ирле-ҡатынлы булып бер аҙ торғас, юлын дауам итә. Алты башлы дейеүҙе алышта еңеп, көмөш йорттағы ҡыҙ менән туй яһап, байтаҡ ваҡыт тора. Шунан туғыҙ башлы дейеүҙе юҡ итеп, алтын йорттағы иҫ китерлек һылыуҙы яҡын итә. Һуңынан егет баҡыр, көмөш һарайлы ҡыҙҙарҙы иптәштәренә йәиһә ағаларына ҡатын итеп бирә, үҙенә алтын һарайлы һылыуҙы ала. Күккә тейеп торған баҡыр, көмөш, алтын йорттар ҡороп ебәрәләр, донъяны шаулатып туй яһайҙар, бергәләп бөтмәҫ байлыҡтарына күмелеп йәшәйҙәр. Әкиәттәрҙә, эпостарҙа батырҙан ҡот алыу,

түл йәйеү күренеше — көслө нәҫел булдырыу әмәле, сөнки батырҙан батыр тыуа. Был «Урал батыр» эпосында бик асыҡ сағыла:

Араһынан бер ҡарты,
Иң олоһо, өлкәне,
Донъяла күп күргәне:
— Батыр буған ирҙәре
(Һәр йыл ғүмер бер батыр)
Иле өсөн яратыр.
Быуын-быуын үтәр ул,
Киләсәк быуын етәр ул,
Һинең даның ҡалһа ла,
Ҡулда ғәйрәт бөтәр ул.
Ир бөтһә лә, ил бөтмәҫ,
Ил батыры — батырҙан,
Батыр ирҙән тыуар ул;
Атанан күреп, уҡ юнып,
Атанан күреп, яу асып,
Ил эсендә үҫәр ул,
Батырҙан батыр тыуғанда,
Атаһындай буғанда,
Бер быуын тип һанаған
Илдә ғүмер итәр ул.
Ундай батыр аҙ булыр,
Булһа ла, яңғыҙ һин булыр.
Был батырҙан ҡот йәйгән,
Батыр ҡыҙҙан һөт имгән, —
Һиңә тиңдәш булыр ул,
Батырға инә булыр ул, —
Тигәс, Урал тыңлаған:
Гөлөстанды алған, ти,
Бер ҙу-ур туй ҡылған, ти,
Бергә ҡунаҡ булған, ти.

Бөтә йылан-яуызды тар-мар иткәс, Урал йыланға ҡаршы күп йыл буйы һуғышҡан Алғыр тигән ирҙе башлыҡ итеп ҡуя, бары ла димләгәс, уның (Ҡәһҡәһәнең сер һарайында күргән, ынйы менән биҙәлгән, ебәк менән уралған) һылыу ҡыҙы Гөлөстанды ала. Халыҡ араһынан бер ҡарты, иң олоһо, өлкәне, донъяла күп күргәне Уралға әйткәнсә, «ил батыры — батырҙан, батыр ирҙән тыуар ул; был батырҙан ҡот йәйгән, батыр ҡыҙҙан һөт имгән, — һиңә тиңдәш булыр ул». Шулай итеп, Урал батыр халыҡты яуыз көстәрҙән ҡотҡарған һәр илдә халыҡ һорауы буйынса кәләш ала, туй ҡыла. Үҫеп, буй еткәс, Яйыҡ, Нөгөш, Иҙел атлы өс улы уға тоғро юлдаш, яуҙа таһыллы ҡулдаш булып, яуыз йәндәрҙе еңә. Урал ҡотонан тыуған батыр бала Иҙел дейеүҙе дөмөктөргәс, Һомай улына: «Батырҙан батыр тыуғанһың, атаңдай батыр буғанһың. Кәүҙәң бала буһа ла, йөрәгең йәш буһа ла, инде үҫеп еткәнһең», — ти.

Ҡыҙҙы ил батырына биреү риүәйәттәрҙә лә күҙаллана. «Ырғыҙ» риүәйәтендә[26] бөтә кешене лә таң ҡалдырып, егеттәрҙең йөрәген яндырып

буй еткән Айстан һылыу бер кемде лә ишһенмәй, атаһынан дүрт тарафтан да батырҙарҙы саҡырып йыйып, ҙур йыйын үткәреүҙе һорай. Ҡыҙ көҫәгән батырҙар атта яҫҡыша, уҡ атыша, көрәшә. Бәйге шарты буйынса улар баҫҡан ерҙәрендә сыҙап тора алмаған, ажарҙарын сәсеп торған ҡырағай аттарҙы нуҡталап-эйәрләп менергә, йәнә, сабып барған ыңғайға аткан уғын сәпкә тейҙерергә тейеш... «Буранбай» риүәйәтендә[27] атай кеше: «Ҡатыным ҡыҙ тапһа, ил батырына бирәм», — тип вәғәҙә итә. Ҡыҙы буйға үҫеп, уға ғашиҡ булмаған егет ҡалмағас, шартын ҡуя: «Кем дә кем батырҙарҙың барыһын да еңеп сыға, шуға Айһылыуымды бирәм».

Батырҙарҙың батырына кейәүгә сығыу, батырҙан ҡот алыу, түл йәйеү йолаһы Шәреҡ донъяһында киң таралған күренеш. Әйтәйек, «Искәндәрнамә», «Хөсрәү вә Ширин» кеүек әҫәрҙәрҙә лә батыр, ҡеҙрәтле ирҙәргә барған, булған ерҙәрендә ҡыҙ бирәләр. Сөнки ғәйрәтле, ҡуш йөрәкле, сәләмәт ирҙән ҡот алғанда, бала тапҡанда, киләсәк быуын да ҡотло, ил-йорт та ҡеүәтле була.

Боронғоларҙың ҡарашынса, батырҙар ҡотоноң, затының нәҫеле, киләсәк быуыны ҡатынға ҡарағанда ҡиммәтерәк вә баһалыраҡ. Мәгәр ҡатын-ҡыҙ тәүге сиратта инәй (донъяға тыуҙырыусы, һөт имеҙеүсе) булараҡ ҡәҙерле һәм хөрмәтле. Ғөмүмән, төрки халыҡтарында әүәл-әүәлдән ҡатын-ҡыҙға ихтирамлы мөнәсәбәт күҙаллана. Әйтәйек, улдар тирмәгә ингәндә тәүҙә инәһе, шунан атаһы менән баш эйеп иҫәнләшкән. Егет ҡыҙҙы әүрәтеп хур итһә, һис кисектергеһеҙ өйләнергә дусар ителгән. Ә ирле ҡатынды көсләүсе үлем язаһына тарттырылған. Йола буйынса тол ҡатын яҙмыш ҡосағына ташланмаған, еңгәһен алған ир-егет уның тураһында үҙ йәмәғәте кеүек хәстәрлек күрергә тейеш булған.

## Төрлө ҡиәфәткә кереү ғилләһе

Халҡыбыҙҙа Йылан, Шайтан, Бүреләр ырыуҙары, Шүрәле нәҫеле, айыуҙар, бүреләр, биреләр, йомрандар, тарпандар, сысҡандар, өкөләр, бурҙайҙар, көшөлдәр аралары бар. Ҙур кәүҙәле көслө кешегә — үгеҙ, әкрен ҡуҙғалған ҡатын-ҡыҙға — һыйыр, тыңлауһыҙ, тәртипһеҙ бәндәгә — дуңғыҙ, юҡ кына сәбәптән ҡыҙып барыусыға — әтәс, хәйләкәр, ялағай кешегә — төлкө, ҡарт төлкө, бик яуыз, мәкерле әҙәмгә ҡарата «ах, һин, ҡара йылан», тиҙәр. Ҡыҙ балаға, ҡатын-ҡыҙға яратып, иркәләп — *аҡҡошом, ҡарлуғасым, былбылым*, ир балаға, ҡыйыу, көслө кешегә *ыласыным, бөркөтөм, арыҫланым*, тип өндәшәләр. Борон балаларға Арыҫлан, Айыухан, Бүребай, Төлкөбай, Ҡондоҙбай, Һеләүһен, Шоңҡар, Ҡобағош, Ыласын, Аҡҡош, Ҡарлуғас кеүек исемдәр ҡушҡандар. Бәғзеләрен әле лә ҡушалар.

Кеше донъя көткәндә, шатлыҡ, ҡайғы-хәсрәт кисергәндә төрлө төҫкә керә, арыҫлан, бүре, төлкө, ат, үгеҙ, һарыҡ, шоңҡар, ҡусҡар, аҡҡош һымаҡ та була. Халыҡ арыҫлан йөрәкле ир арыҫландарын данлай. Батыр, ғәйрәтле егеттәр ҡатын-ҡыҙға ла оҡшай.

Донъяла һылыу ҡыҙҙы һайлау, ҡаратыу, йәр итеү өсөн ир затына ла кешеләрҙең һылыуы булыу шарт. Был Ҡәһҡәһә батшаның улы Зәрҡумдың Уралға серен һөйләүендә сағыла:

Беҙгә яҡын бер ерҙә,
Ҡоштар торған ҙур илдә
Самрау тигән батша бар.

Шул батшаның Ҡояштан
Тыуып төшкән ҡыҙы бар.
Мин һораным — бирмәне,
Һин — йылан, тип ҡыҙы ла
Мине тартып килмәне.
Мин атама ялындым,
Көнөн-төнөн ялбарҙым,
Атай, шуны ал, тинем,
Һис бумаһа иленә
Утлы яуың ас, тинем.
«Бөгөн ауға сыҡ, — тине,
Йылан туның кей, — тине;
Ун ике тарбаҡ мөгөҙлө
Болан табып эй, — тине.
Шуны йотһаң, донъяла
Төрлө төҫкә керерһең,
Кешеләрҙең һылыуы,
Бер егет, ир булырһың,
Ҡош иленә барырһың,
Самрауҙың бер ҡыҙын
Үҙең һайлап алырһың».

Төрлө төҫкә кереүҙең ғилләһе бик боронғо замандарға барып тоташа. Грек мифологияһында Зевс ҡатыны нимфа Каллистоны, өсөнсө ҡатыны көнсөл Геранан йәшереп, инә айыуға, үҙенең ейәнен үлтергән Ликаонды бүрегә, улы Аркас менән Каллистоны Оло Етегән һәм Кесе Етегән йондоҙлоҡтарына, храмда һөйөш ҡылған Аталанта менән Меланионды арыҫландарға әүерелдерә. «Урал батыр» эпосында Зәрҡумдың атаһы Ҡәһҡәһә аждаһа тунын һала, кейә, туғыҙ башлы йылан ҡыҙ төҫлө була. Зәрҡум егет, йылан, көшөл ҡиәфәтенә лә инә. Йылан Һомайҙы алам, тип һорап йөрөй. Ауҙа ауланған аҡҡош әҙәм телендә үҙенең ер ҡошо түгеллеген, йәшәгән иле барлығын, Самрау батшаның Һомай тигән ҡыҙы икәнен әйтә. Ҡош илендә ҡош тыуҙары ҡош тундарын һалып, һылыу ҡыҙҙарға әйләнә. Һомайҙың һорауы буйынса Урал йым-йым иткән ынйылай күлдә йөҙгән ҡошто эҙләп таба һәм үҙе лә ҡош рәүешенә кереп, уны барып тота. Ул иһә — бер саҡта ҡыҙ булған, дейеүҙәрҙән ҡасып, һис донъяла булмаған, кеше төҫөн белмәгән ҡош рәүешенә ингән Айһылыу. Урал уға былай ти:

Ысынлап та ҡош буһаң,
Ҡыҙға юрый әйләнһәң,
Һине алып ҡайтайым,
Үҙем белгән һарайға
Һине илтеп бирәйем.
Анда барғас һөйләрһең,
Үҙ теләгең әйтерһең,
Теләһәң, ҡош булырһың,
Теләһәң, ҡыҙ булырһың.

Айһылыу үҙ иленә ҡайтҡас, ҡош тунын һалып, йәнә һылыу ҡыҙға әйләнә. Ҡош тунын һалыуҙың, йәки кейеүҙең сәбәбе тормош хәлдәренә лә бәйле. Урал үлгәс, Һомай шулай ти:

Һиңә йәшләй осорап,
Шатлығымдан ҡыҙ булып,
Ҡош тунымды һалғайным...
Инде хәҙер нишләйем?..
Ни әйтергә белмәйем.
Ҡыҙ булып кемгә ҡарайым?
Һомай исемем ҡалһа ла,
Кешеләр ҡош тиһә лә,
Ҡош тунымды һалмайым,
Ситтәр күҙен алырлыҡ
Ҡабат һылыу бумайым.
Һиндәй батыр табалмам,
Батырға инә булалмам...

Әхмәт Сөләймәнов, Рөстәм Рәжәпов «Башҡорт халҡының мифологик эпосына хас ҡайһы бер үҙенсәлектәр» күҙәтеүендә[28] билдәләүенсә, «мифологик эпостарҙың геройы икеләтә ят, хатта өсләтә ят затты кәләш итә. Әйтеүебеҙсә, Һомай — ҡош ҡиәфәтендәге ҡыҙ ғына түгел, күк ҡыҙы ла; Нәркәс менән Һыуһылыу иһә — алтын өйрәк рәүешенә кергән һылыу ҡыҙҙар, улай ғына ла түгел, һыу аҫты батшаһының ҡыҙҙары. Быndай алым, бер яҡтан, был образдарҙың бик тә архаик сығышынан килә, икенсенән, уларҙан тыуасаҡ, уларҙан ҡаласаҡ нәҫелдең тотемистик сығышлы, йәғни ғәҙәттән тыш затлы икәненә баҫым яһау сараһын үтәүе лә ихтимал. Герой үҙенә иште ҡош ҡиәфәтенән һайлау мотивына икенсе яҡтан килергә лә була. Боронғо мифологик ҡараштар буйынса, ҡош-ҡорт — әҙәм балаһының донъяға яралыуына тәүсәбәп тип иҫәпләнгән. Шуға ла Һомайҙы ла, ҡош ҡиәфәтен алыуға һәләтле Нәркәс менән Һыуһылыуҙы ла кеше затының инәһе итеп танытырға теләүгә төшөнөүе ҡыйын түгел». «Ҡош-ҡорт — әҙәм балаһының ата-инәһе» тигән мифологик мотивҡа нигеҙләнгән сюжеттар, Е.М.Мелетинский «Происхождение героического эпоса» хеҙмәтендә яҙыуынса ла, үлгәндән һуң «кеше яңынан үҙ асылына ҡайта, киренән ҡош-ҡортҡа әүерелә»[29] ҡарашына ҡорола.

«Аҡбуҙат» эпосында Һәүбән: «Инәй, һин ништәп ҡош булып ҡалдың?» — тип һорағас, Һомай: «Беҙ алыҫ юлдан килгәндә барыбыҙ ҙа ҡош булып осабыҙ. Килендәрем дә шулай. Ергә еткәс, ирҙәребеҙ үпһә, үҙ хәлдәребеҙгә ҡайтабыҙ, ҡатын булабыҙ. Мин килеп еткәнсе, ирем үлгәйне, шуға мин үҙ хәлемә ҡайта алманым. Килендәремде уландарыбыҙ үпте — улар тағы ҡатын хәленә инде», — ти.

Спиритизм (рух) фәлсәфәһе буйынса ла, кеше ғүмере үлем менән бөтмәй. Хәҙерге аң кимәлендә кеше үҙенең ысынбарлыҡтағы тәбиғәтен төшөнмәй, үҙен физик тән тип кенә иҫәпләй. Ә ысынында иһә ул — сиратлап төрлө тәндәр менән файҙаланған, бер йәшәйеш мәленән икенсеһенә күскән үлемһеҙ йән, рух. Боронғо Шәреҡ фәлсәфәһендә лә шулай уҡ кеше йәненең күп тапҡыр йәшәүе белдерелә. Баҡһаң, башҡорт халыҡ әйтемдәре лә кешенең тыуыуына, үлеменә, ғүмеренә генә ҡағылмай, йәндең килеүенә-китеүенә ишара яһай: килгән йәнгә — китем хаҡ, тән ҡартая, йән ҡартаймай, йөҙ ҡартайһа ла, күңел йәш...

Гипноз тәьҫирендә кешеләрҙән тыуғансы ҡайҙа булғандарын һораһаң, йыһанда осоп йөрөүҙәрен, йондоҙҙарҙан осоп килеүҙәрен, бәғзеләре

ҡанатлы бәпәйҙәр һымаҡ осоуҙарын әйтә. Медицина фәндәре докторы, академик Виктор Хромов лабораторияһында махсус компьютерҙың экранында йән шулай күренә: яңы тыуған баланы хәтерләткән йән эйәһе һымаҡ, килешһеҙерәк ҙур башлы, бәләкәй генә кәүҙәле, аяҡ-ҡулдары ҡанатҡа, елпеүескә оҡшаш һәм кәүҙәнән ары араулыҡта юғала барған кеүек. Күҙалланыуынса, йән фәрештә һымағыраҡ. Виктор Хромов лабораторияһы бер нисә кешегә йән күсергән. Йәндең күсеүе тураһында боронғо ҡараштар халыҡ ижадында, йолаларҙа, дини хеҙмәттәрҙә лә сағылыш тапҡан. Йәндең кейектәргә, ҡош-ҡортҡа күсеүе лә һүрәтләнә. Әйткәндәй, академик В.Казначеев үткәргән тәжрибәләр тере күҙәнәктәрҙән тыш «йыһан тормошо», «поле тормошо» барлығы тураһындағы фараздарҙы раҫлай.

## Ҡыҙҙың сәсенән тотоу

Башҡорт халыҡ эпостарында бик тә серле һәм ғилләле күренеш күҙәтелә: батыр егет һыу ҡыҙын ҡулынан түгел, сәсенән, толомдарынан тотоп ала. «Аҡбуҙат» эпосында Сура батырҙан ҡот алып, батыр тигән заты бар Һәүбән алтын тәхет өҫтөндә алтын сәстәрен тарап ултырған ҡыҙҙың (Нәркәстең) һиҙҙермәй генә сәсен урап тота. Шул ыңғайға ҡыҙ һиҫкәнеп китә. Һәүбән ҡыҙҙың сәсен ебәрмәй. «Заятүләк менән Һыуһылыу» эпосында Сәмәр хандың Заятүләк атлы батыр улы Асылыкүлдең ситендә яҫы таш өҫтөндә толомдарын тағатып, алтын тараҡ менән алтмыш ҡолас оҙонлоғо ҡара сәсен тарап ултырған һыу ҡыҙын күреп, уның һылыулығына таң ҡалып, иҫе китеп ҡарап тора. Әкренләп-әкренләп кенә яҡынлай ҙа аңғармаҫтан уның ебәк кеүек йомшаҡ сәсенән тотоп ала. Һыу ҡыҙы нисек кенә ысҡынып китергә тырышһа ла, егет ебәрмәй. Егет ҡулының ныҡлығын, унан ҡотола алмаҫын һиҙеп, ҡыҙ ялбарырға тотона. Ни тиклем генә ялынмаһын, Заятүләк һыу ҡыҙын ебәрмәй, ғашиҡ булып: «Икәү бергә булайыҡ, бергә тормош ҡорайыҡ», — ти.

Билдәле фольклорсылар Кирәй Мәргән, Әхмәт Сөләймәнов, батыр егет ҡыҙҙың сәсен тотоп, көс-ҡеҙрәтен ала, тип фараз итә. Бәпестәрҙең инәләренең сәсен услап серем итеүен күҙәткән бар. Улар инә һөтөн имеп тә, бәлки, инә сәсен тотоп та ҡеүәтләнәләрҙер.

## Ата һүҙен тотмаған

Аттан ала ла тыуа, ҡола ла тыуа тигәндәй, яҡшынан яҡшы ла, яман да тыуа. «Урал батыр» эпосында Йәнбирҙе менән Йәнбикәнең улдары Урал — илен, халҡын бәхетле иткән батыр, Шүлгән — кешеләрҙе ишһенмәҫ, яҡшылыҡты тиңһенмәҫ ыулы йөрәкле зат. Ул ата һүҙен тотмай, яуызлыҡты — дан, яҡшылыҡты хур ҡыла, шуның менән ата йөҙөн ят, инә һөтөн ыу итә. Урал уға юлдаш булып, ҡыҙ һайлаһа — буй, ат һайлаһа — яй ҡуйып, теләгәнен бойомға ашырып та ҡарай. Әммә Шүлгән гелән яуызлыҡҡа ыҡлай, ҡәрҙәштәрен хур, Айһылыуҙы бәхетһеҙ итә. Урал әсенеп, уға шулай ти:

Һөттәй таҙа берәүҙең,
Күҙ ҡаралай икәүҙең
Берен димләп бирҙерҙем,

Йөрәгең аҡ булыр тип,
Һине маҡтап һөйҙөрҙөм,
Һин һүҙеңдә торманың...

Ата хаҡы, инә хәтере өсөн яҡшылыҡ көтөп, Урал Шүлгәнде һынап ҡарай, мәгәр ул йәнә намыҫ тапай. Әҙәм яманы шулай изгелеккә яуызлыҡ менән яуап бирә, инә һөтө менән кермәгәнгә, тана һөтө менән кермәй. Айҙан тыуған Айһылыу мөхәббәт сәсеп, һағыш ура, нуры кәмеп, хурлана. Ата-инәһенә, ҡәрҙәштәренә игелек күрһәтмәгән Шүлгән, үҙе лә игелек күрмәй. Шулай итеп, улдың атаһына оҡшап тыумауы, ике яҡшынан бер яман тыуыуы ла ихтимал. Ундайҙың донъяла име лә, йәме лә булмай.

## Ир ҡайҙа — ҡатын шунда

Был ғилләнең асылын донъя, әҙәм заты яратылыуға бәйле боронғо мифтарҙан төшөнөргә мөмкин. Хаҡ Тәғәлә Әҙәмде үҙенең ҡөҙрәте менән бар итә, уға рухынан йән бирә, иптәш булһын өсөн Һауаны ялта. Йәнә, Аллаһы Тәғәләнән ҡылынған хитаб буйынса, ҡатындар ирҙәре хөкөмөндә һәм улар ирегендә булыр.[30] Библия хикәйәттәрендә иһә Яхве илаһ кешенән алынған ҡабырғанан ҡатын яһай һәм уны кешегә алып килә. Ир әйтә: «Был һөйәк — минең һөйәктәрҙән, тәне — минең тәндән; ул ҡатын тип аталасаҡ, сөнки ирҙән алынған. Шуға ла кеше атаһын, инәһен ҡалдырып, үҙенең ҡатынына һыйынасаҡ һәм бер тән буласаҡ».[31] Шулай итеп, ҡатын-ҡыҙ ирҙән яратылған һәм ул бер йән, бер тән булып ире янында йәшәргә тейеш.

Халыҡ аҡылынса, алтын-көмөш яуған ерҙән тыуған-үҫкән ил артыҡ. Борон кендек ҡаның аҡҡан, ҡанбабалар ғүмер иткән ерҙә түл йәйеп, байман табып йәшәү, ырыуыңдың, ил-йортоңдоң именлеген һаҡлау хуш күрелгән, изге йола һаналған. Урал батыр мәңге үлмәҫ төҫ алһын өсөн Йәншишмә һыуын йәнтөйәгенә һибә. Халыҡ торлаҡ ҡороп, бер-беренә йөрөшөп, бергә уйнап, көлөшөп, ҡоҙа-ҡаҙна булышып, йәше-ҡарты йоплашып, именлектә көн итә, тын эсеп, рәхәтләнеп ҡала.

Һомай ҙа, Уралға килеп, Уралды уйлап моң сәсә, аҡҡош булып түл йәйеп, аҡҡош тыуын үрсетә. Иҙел, Яйыҡ, Нөгөш, Һаҡмар батырҙар инә һөтөндәй илде мәңге һуғарыр, ҡыуандырыр һыу сығарып, йылғалар ағыҙа.

«Аҡбуҙат», «Заятүләк менән Һыуһылыу» эпостарында ла батырҙар үҙ тыуған илен һыу аҫты донъяһына, алтын һарайҙарға алмаштырмай, һыуһылыуҙарға өйләнеп, мал эйәртеп ергә ҡайта. Әлбиттә, ҡыҙҙарҙың егеттәрҙе үҙ илдәрендә ҡалдырырға ла уйы юҡ түгел. Нәркәс Һәүбәнгә былай ти:

Егет, һүҙең һүҙ буһын,
Һиңә антым бирәйем,
Үҙеңде алып илемә,
Атам торған еремә,
Ҡан-яу асмай арала
Һоҡтанғаның бирәйем.
Алтын һарай эсендә
Мамыҡ түшәп йәйәйем,
Ни теләһәң алырға,
Һорағаның бирәйем.

Һарайымда ҡалырһың,
Беҙҙә толҡа тапмаһаң,
Илем аралап йөрөрһөң,
Бар һарайҙы күрерһең.
Мине Нәркәс тип һөйһәң,
Мөлхәтһенмәй барына,
Шүлгән һарай иленә,
Нәркәстәй хур ҡыҙына,
Аҡбуҙ толпар менәрһең,
Ҡулға бәхетең туптап,
Уралыңа ҡайтырһың.

Һарай ҡыҙҙары йырлап-йырлап ҡунаҡ итһә лә, Һәүбән сит мөхиттә толҡа тапмай, бойоға, Аҡбуҙат менән Уралына ҡайта. Һуңынан Нәркәс тә буй бирә, һөйгәне менән тиң ғүмер һөрөргә риза була.

«Заятүләк менән Һыуһылыу» эпосында ла Заятүләк, Асылыкүл төбөндә сихри донъяла сибәрлектә тиңдәше юҡ һөйгән Һыуһылыуы менән бер мохтажһыҙ байманлыкта йәшәүенә ҡарамаҫтан, тыуған илен, ер тормошон һағына. Кейәүенең һарғайып һағыныуын күреп, һыу батшаһы: «Заятүләк, һин ер улы, ерһеҙ йәшәй алмаҫһың. Һин — бөгөндән үк үҙ иркеңдә, бында көсләп тотмайым. Балҡантауыңа ҡайтып донъя көтөгөҙ. Һыуһылыу һинең менән барыр: ир ҡатын артынан йөрөмәй, ҡатын ир артынан йөрөй. Өйөрөмдән Аҡбуҙ толпарҙы ал. Донъя ҡороп ебәреү өсөн мал бирәм», — ти. Заятүләк Аҡбуҙ толпарға атланып, Һыуһылыуҙы алдына ултыртып, һыу батшаһы менән хушлашып, күлдән сығып китә, Балҡантауға юл тота.

Эйе, ил терәге — ир, ир терәге — бисә, ил яҙмышы — ир яҙмышы. Кеше ҡайҙа ғына бармаһын, ҡайҙа ғына йөрөмәһен, тыуған тупраҡ һыуытмай, уның туҙаны ла ҡәҙерле, әреме лә хуш еҫле. Боронғолар аманатынса, алтын-көмөш яуған ерҙән тыуған-үҫкән ил артыҡ. Ай, ҡояш кеүек, донъяла тыуған ер ҙә бер генә.

Тыуған ер — алтын бишек. Ул кейәү кешенең ил-йортона күсеп киткән, ғүмерен шунда кисергән ҡатын-ҡыҙҙың да күңел төбөндә. «Ҡуңыр буға» эпосында кеше түгел, малҡай ҙа быҙауҙарын эйәртеп, тыуған ерем тип ҡайта. Таңдыса иһә ата-инәһен ҡосаҡлап, күкрәгенә ҡыҫып һамаҡлай:

Килсе, килсе, инәйем,
Аптырама, атайым,
Күҙ туйғансы ҡарайым,
Бик һағындым, күрәйем,
Күҙ йәшемде түгәйем.
Күргем килеп һарғайҙым,
Илай-һыҡтай ҡартайҙым,
Эсәр һыуым, ашар ашым
Ошо илемдә ҡалғандыр.
Күп булмабыҙ беҙ бында:
Унда ҡалды ун балам,
Уныһы ла матурҙар,
Атаһындай батырҙар.

Таңдыса күкрәк һөтөн имеҙеп, күҙ ҡарам, тип өҙөлөп, йөрәк итем, балам, тип йәнен дә бүлеп биргән инәһе Өһәбикәнең тубығына ятып йоҡоға тала. Инәһенең бер бөртөк йылы йәше тама, был йәш ата менән инәнең тәүләп ҡауышҡандағы йәше була. Унан һуң ике күҙенән ике бөртөк эҫе йәше тама. Быныһы инә менән ҡыҙҙың айырылышыу аралығындағы күҙ йәше була. Ул яндыра төшә, Таңдыса һиҫкәнеп уяна, ата-инәһен күреп, шат йылмая. Уның хөрмәтенә һый-хөрмәт, уйын-көлкө ойошторола. Инәһе һөйөнә, атаһы шатлана. Мәгәр Таңдысаның яҙмышы килен булып төшкән йортонда, балалары ҡалған ерендә. Шуға ла ул ҡайтышлай йөрәге елкенеп йырлай:

Беҙ ултырған ерҙән күренеп ятҡан
Иҙел башы — Ирәмәл тау икән.
Беҙ киткәндә бары ла теүәл ине,
Илгенәйем имен, һаумы икән?

[1] Башҡорт халыҡ ижады. Эпос. Өфө: Китап, 1998.
[2] Башҡорт халыҡ ижады. Эпос: яҙма ҡисса һәм дастандар. Өфө: Китап, 2004.
[3] Сәғитов М. Башҡорт халыҡ эпосы // Башҡорт халыҡ ижады. Эпос. Өфө: Китап, 1988. 17-се бит.
[4] Башҡорт халыҡ ижады. Эпос: яҙма ҡисса һәм дастандар. Өфө: Китап, 2004. 183-сө бит.
[5] Башҡорт халыҡ ижады. Эпос. Өфө: Китап, 1998.
[6] Шунда уҡ. 254-се бит.
[7] Башҡорт халыҡ ижады. Эпос. Өфө: Китап, 1998.
[8] Кәрим М. Көндәлектәр // Ағиҙел, 2006, №10. 11-се бит.
[9] Башҡорт халыҡ ижады. Эпос: яҙма ҡисса һәм дастандар. Өфө: Китап, 2004.
[10] Башҡорт халыҡ ижады. Эпос. Өфө: Китап, 1988.
[11] Башҡорт халыҡ ижады. Риүәйәттәр, легендалар. Өфө: Китап, 1988. 301-се бит.
[12] Шунда уҡ. 270-се бит.
[13] Шунда уҡ. 273-сө бит.
[14] Шунда уҡ. 285-се бит.
[15] Шунда уҡ. 308-се бит.
[16] Розанов В. Люди лунного света. М., Дружба народов, 1990. С. 39—40.
[17] Башҡорт халыҡ ижады. Риүәйәттәр, легендалар. Өфө: Китап, 1988. 291-се бит.
[18] Шунда уҡ. 274-се бит.
[19] Шунда уҡ. 310-сы бит.
[20] Башҡорт халыҡ ижады. Эпос. Өфө: Китап, 1988.
[21] Шунда уҡ.
[22] Башҡорт халыҡ ижады. Риүәйәттәр, легендалар. Өфө: Китап, 1988. 296-сы бит.
[23] Шунда уҡ. 259-сы бит.
[24] Биче-оол С.М. Тувинский свадебный обряд // Восток в исторических судьбах народов России. Уфа, 2006. С. 29.
[25] Пещерва Е.М. Свадьба в ремесленных кругах Каратага // Семья и семейные обряды у народов Средней Азии и Казахстана. М., Наука, 1978. С. 179.
[26] Башҡорт халыҡ ижады. Риүәйәттәр, легендалар. Өфө: Китап, 1988. 106-сы бит.
[27] Шунда уҡ. 239-сы бит.
[28] Сөләймәнов Ә., Рәжәпов Р. Башҡорт халҡының мифологик эпосына хас ҡайһы бер үҙенсәлектәр // Башҡорт халыҡ ижады. Эпос. Өфө: Китап, 1988. 320-се бит.
[29] Мелетинский Е.М. Происхождение героического эпоса: Ранние формы и архаические памятники. М., Издательство Восточная литература, 1963. С. 26—27.
[30] Пәйғәмбәрҙәр тарихы. Ҡазан: Дом печати, 2003. 22—30-сы биттәр.
[31] Мифология. Большая Российская энциклопедия. М., 2003. С. 17.